ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

6-12 февраль (шаҡай) 2021

№6 (944)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы йылда ла "Кискә Өфө" гәзите менән бергә булыуығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Йәнәшәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында баҫмабыҙға яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, иҫкәртә күрегеҙ: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, уны марттан алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы баҫмабыҙ дүрт айға 483 һум 72 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡурған башҡорттарында** 6-7



**Шиғырҙар яҙыла...** һағыштан, йөрәк әрнеүенән, тетрәнеүҙән 8-9



**Туған тел тылсымын...** тамашасыларға тапшырыусы булды ул 10



**Ҡурайсы** 11




**ТВ-программа** 14


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

### Былтыр йыл һуңында республика Башлығы ауылдар яҙмышы, бөлә барған ауылдарҙы тергеҙеү тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Нисек тормошҡа ашырып була ошо бик үк еңел булмаған проектты?

***Тәлғәт ШАҺМАНОВ, Күмертау ҡалаһы:*** Журналист һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе, тарихсы буларак, республиканың төрлө төбәгендә булырға тура килә. Шунан сығып, бәләкәй һәм төпкөл ауылдарҙа юл проблемаһының киҫкен булыуына күп тапҡыр шаһитлыҡ ҡылғаным булды. Шуға ла, бәләкәй ауылдарҙы тергеҙеүҙе, иң беренсе, муниципалитеттарға ҡараусы юл мәсьәләһен хәл итеүҙән башлау дөрөҫ булыр ине, тим. Юлдар - иҡтисади йәһәттән дә, социаль яҡтан да мөһим стратегик тармаҡ ул. Йәшәйеште тәьмин итеүсе иң мөһим өлкәгә айырым мөнәсәбәт булырға тейеш.



Бәләкәй ауылдарҙа мәктәп, клуб, фельдшер-акушерлыҡ пункты, балалар баҡсаһы һәм кибет бер бинала булып, бер ҡаҙанлыҡтан йылытылыуы уңайлы һәм һөҙөмтәле булыр ине. Тораҡ пунктта ошо социаль әһәмиәтле объекттарҙың булыуы бик тә мөһим. Оло йәштәгеләр өсөн медпункт нисек кәрәк булһа, йәш ғаиләләргә мотлаҡ мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы, мәктәп, клуб булыуы мөһим. Ҡулайлаштырыуға бәйле һуңғы йылдарҙа уларҙың күбеһенең эшмәкәрлеге туҡтатылды. Билдәле инде, һөҙөмтәлә уларҙа эшләп йөрөгән белгестәр ҡыҫҡартылды, эшһеҙ ҡалды.

Йыш ҡына район үҙәгенән ситтәрәк урынлашҡан йәки төпкөл ауылдарға заманса технологиялар барып етмәү күренеше борсой. Шуға күрә интернет үткәреү ҙә тәү маҡсаттарҙың береһе булырға тейеш. Мәктәп менән балалар баҡсаларын шәхси итеп асырға һәм унда уҡытыу-тәрбиә эштәрен тулыһынса туған телдә алып барырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Сөнки хәҙерге уҡыу пландары республикаға исем биреүсе милләт балаларының был йәһәттән ихтыяждарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмай.

Бәләкәй ауылдар иҡтисадына килгәндә, улар эргә-тирәләге ҙур ауылдар менән тығыҙ бәйле булырға тейеш. Аҙыҡ-түлек эшкәртеүсе эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Уларҙың, башлыса, башҡорт брендтарына бәйле булыуы мөһим. Һәр бер районда, район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа республикала етештерелгән сифатлы, тейешле талаптарға яуап биргән аҙыҡ-түлек менән сауҙа итеүсе кибеттәр, магазиндар, сауҙа үҙәктәрен күпләп асыу зарур. Ул ваҡытта аҡса сит ҡулдарға китмәйәсәк. Бына шулай күрәм бәләкәй йәки бөтөп барған башҡорт ауылдарын үҫтереү проектын.

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАЙМОРАТОВ ҺӘЙКӘЛЕ...

## Совет майҙанында

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда генерал-майор Шайморатов һәйкәленең проекттар конкурсында еңгән макетын күрһәтте.**

"Торатау" Конгресс-Холында Шайморатов һәйкәле макеттарының конкурс экспозицияһын 500-ҙән ашыу кеше - йәмәғәтселек вәкилдәре, ижади берекмә ағзалары һәм республикала йәшәүселәр килеп ҡараны. Тамашасылар һорауҙар яҙылған ҡағыҙҙа 19 эштең һәр береһен ун балл буйынса баһаланы. Тәүҙән үк конкурс еңеүсеһенең эше Өфөнөң төҙөкләндерелгән Совет майҙанының мәҙәни үҙәге була тип иғлан ителгәйне. Еңеүсе макеттың авторҙары - скульптор Салауат Щербаков һәм архитектор Константин Донгузов. Уларҙың проектында генерал Шайморатов ҡына күрһәтелмәгән, уның легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының сағылышы ла бар. "Әле Өфөнөң Совет майҙанында төҙөкләндереү эштәре тулы ҡеүәттә бара. Уны халыҡ геройының бына тигән һәйкәле биҙәйәсәк. Монументтың проектын республикала йәшәүселәр үҙҙәре һайланы", - тине Радий Хәбиров. Республика халҡы ил Президентының 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исемен биреү тураһында Указын шатланып ҡабул итте, тип тә билдәләне ул.




12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тынөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАРЫҒЫҘ...

## туған телдә һөйләшһен

***Заһир ҠОТЛОСУРИН, эшҡыуар:*** Бөгөн туған телебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ торошо, киләсәге һәр аңлы башҡортто борсоуға һалалыр, моғайын. Ысынбарлығыбыҙ шундай: бер быуындан һуң был ҡиммәттәребеҙҙе юғалтыуыбыҙ мөмкин. Хәҙер ҡала мөхитендәгеләр генә түгел, ауыл балалары ла башҡортса бик һөйләшеп бармай. Сөнки ата-әсәләр еңелгә һалышты: балаларын туған телдә һөйләштереү талабын йомшарттылар, тәрбиә эштәрен телевизорға йә интернетҡа тапшырып ҡуйҙылар. Нисек һөйләшһә лә һөйләшһендәр, нимә менән шөғөлләнһәләр ҙә шөғөлләнһендәр, тик уларҙың эшенә ҡамасауламаһындар ҙа, урамда ел һуғарып йөрөп, проблема тыуҙырмаһындар...

Йәш быуын туған башҡорт теленән генә түгел, туған мәҙәниәтенән дә ситләшә бара бит, һиҙәһегеҙме? Донъя кимәлендәге трендтарҙан тыш, ут күршеләребеҙ ҙә шул тиклем көслө йоғонто яһай беҙгә. Беҙҙең "Курай-ТВ" каналынан башҡа башҡорт теләндәге йырҙарыбыҙ-көйҙәребеҙ яңғырап торған күнел асыу каналдарыбыҙ юҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тапшырыуҙары тик татарса ғына алып барылған "Туған тел", "Матур ТВ", "ТМТV" кеүек цифрлы каналдарға конкурент була алмай "Курай-ТВ" ла. Ысынында, бөгөн беҙ мәҙәни ассимиляцияға дусарбыҙ, был көнкүрешебеҙҙә бик асыҡ сағыла. Хатта ауылдарҙа ла күрше республика башҡарыусыларын тыңлайҙар, мәжлестәрҙә, байрамдарҙа уларҙың йырҙары күберәк яңғырай... Инстаграм, Тик-ток кеүек социаль селтәрҙәр контенты - татарса, улар йәштәрҙе үҙҙәренең ҡыҙыклы ҡыҫҡа видеолары менән йәлеп итәләр. Ҡарағыҙ: хатта мәсеттәребеҙҙә үҙебеҙҙең башҡорт муллаһы вәғәҙе татарса һөйләй, быныӊ сәбәбен һораһаң, бер яуап - диндә тел юҡ.

Был хәлдәр башҡорт асылын юғалтыуға килтерәсәк икәнен аңларға ваҡыт түгелме? Быға асыҡ миҫалдар ҙа бар: Свердловск өлкәһе территорияһында йәшәгән өпәй, һыҙғы, терһәк ырыуы вәкилдәре үткән быуаттың 60-сы йылдарына тиклем үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләгән, ә хәҙер уларҙың рухы ла, теле лә үҙгәргән. Тейешенсә иғтибар булмаһа, ярты быуат эсендә тотош бер халыҡ икенсе милләткә әйләнгән...

Милләттәштәргә әйтер һүҙем шул: милләтте юғалтыу фажиғәһен кисермәйек, тиһәгеҙ, балаларығыҙ менән башҡорт телендә һөйләшегеҙ, башҡортса исем ҡушығыҙ, башҡортса йырлағыҙ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Былтыр йыл һуңында республика Башлығы ауылдар яҙмышы, бөлә барған ауылдарҙы тергеҙеү тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Нисек тормошҡа ашырып була ошо бик үк еңел булмаған проектты?***

***Ринат ШӘЙБӘКОВ, Белорет районы Йөйәк ауылы:*** Республика Башлығының бөләкәй һәм бөтөп барған ауылдарҙың яҙмышына битараф булмауын күреп, әлбиттә, күптәр ҡыуанғандыр. Ҡыуанырлығы ла бар шул. Баймаҡ районы Урғаҙа ауылында эш сәфәре ваҡытында Радий Фәрит улы хатта бөлөп барған тораҡ пункттарҙы тергеҙеүҙәге өҫтөнлөклө юлдарҙы ла билдәләп үтте. Урғаҙа миҫалында, иң беренсе, халыҡтың тормош сифатын яҡшыртыу, йәғни квалификациялы белгестәрҙе йәлеп итеү, медпункт, ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү кеүек социаль әһәмиәтле объекттарҙың эшен яйға һалыу зарурлығын билдәләне.

Эйе, ауылда фельдшер-акушерлыҡ пункты эшләһә, мәктәп, магазин булһа, халыҡ ситкә китеү яғын ҡайырмаҫ ине. Ошо өс мөһим социаль объекттарға мәҙәни-ял үҙәген индерергә мөмкин. Бөгөнгө заманда шулай уҡ интернет бик кәрәкле йүнәлеш. Быйылғы пандемия осоронда ул айырыуса үҙенең актуаллеген раҫланы. Бөлөп барған тораҡ пункттарҙы күтәреү өсөн беҙҙең республикала әҙер проекттар бар. Уларға мин "Ауыл врачы", "Ауыл ипотекаһы", "Ауыл тренеры" кеүек фәҡәт ауыл еренә тәғәйенләнгән программаларҙы индерер инем. Ғөмүмән, Хөкүмәтебеҙ ауылдарға йөҙ менән боролмай, ауылда йәшәргә теләүселәр өсөн шарттар булдырмай тороп, ауылдар яҙмышын ыңғай хәл итеп булмаясаҡ, тип иҫәпләйем.

Мәсәлән, беҙҙең Белорет районында Ҡолмас ауылын тергеҙеү ошоғаса күптәр өсөн тормошҡа ашмаҫ хыял ғына булды. Күптән түгел ауылға күрше районлан электр линияһы һуҙылып, электр уты үткәрелде. Шулай итеп, ГОЭЛРО планының 100 йыллығына Рәсәй тулыһынса электрлаштырылып та бөттө, тип әйтәйемме... "Социализм плюс бөтә илде электрлаштырыу" тамамланһа, коммунизм буласаҡ, тип хыялландыҡ бит заманында... Ҡолмас - сағыштырмаса йәш ауыл. Уға нигеҙ 1921 йылда ғына һалынған. Егерме беренсе йылғы аслыҡтан һуң Собханғолдан, икенсе төрлө уны Урман Рәүәт тип тә йөрөттөләр, дүрт кеше, шул иҫәптән минең олатай ҙа Ҡолмас яланына килеп тараҫ сәскән. Ул йылды тары ныҡ уңған. Шуға ла кешеләр был урынды оҡшатып, землянкалар эшләп, ҡышты шунда сығалар. Яҙын яйлап йорттар һалалар, халыҡ күсеп килә. Заманында унда етмешләп йорт бар ине. 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышына 40-ҡа яҡын кеше китә был ауылдан, шуның 13-өнә генә тыуған яғына әйләнеп ҡайтыу насип була. Өфө-Белорет трассаһынан йыраҡ түгел урынлашҡан был тораҡ пункт ҡасандыр гөрләп торған, үҙ белем, мәҙәниәт усағы, магазины, урман сәнәғәте хужалығы һәм башҡа ойошмалары булған ауыл ине. Ул ойошмалар ағастың "һөҙләгән һөҙөп бөткәс", икенсе ергә күсеп китте, халыҡ эшһеҙ ҡалды. Һөҙөмтәлә үткән быуаттың 60-70-се йылдарында Ҡолмас киләсәкһеҙ, йәғни перспективаһыҙ ауылдар иҫәбен тулыландырҙы, тиҙ арала уның эшкә һәләтле йәштәге халҡы Архангел, Белорет районларының башҡа урман ҡырҡыу ойошмаларына күсте, Магнитогорск, Силәбе тарафтарына юлланды. Шулай уҡ Стәрлетамаҡҡа күсеп, ундағы бараҡтарҙан мөйөш алып, күпләп шунда йәшәнеләр. Ауылда ҡарттар ғына ҡалды. Өләсәйем, уның күршеһе, тағы Байтулла бабай һәм Ғәйникамал әбей ауылдың иң һуңғы йәшәүселәре булды. Зифа апайым Стәрлетамаҡтан өләсәйем янына ҡайтып, ул вафат булғас та ауылда тороп ҡалды, әле лә шунда йәшәй. Ауылды бер нисә тапҡыр тергеҙергә маташтылар. Һуңғы йылдарҙа өләсәйем Бибисараның нәҫелдәре Абдуллиндар был эшкә ныҡлап тотондо. Әле юл буйында ике кафе эшләй. Уларҙы ауылды тергеҙеү хыялы менән янған Зәлиә Ғәлийәнова (Абдуллина), ағаһы Заһир Абдуллин асты. Был заманса тамаҡ ялғау урындары Өфө - Инйәр трассаһында Елмерҙәк тауына етмәҫ борон урынлашҡан. Юлда йөрөүселәргә бейек тауға менер алдынан туҡтап ял итеп алыр өсөн бик уңайлы. Тимур һәм Илдар тигән егеттәр ҡортсолоҡ эшенә тотондо, бер юлы малсылыҡ менән дә шөғөлләнергә иҫәптәре. Был ауылда әлегә мәктәп тә, медпункт та юҡ, әлбиттә. Шулай ҙа ауылға ҡайтып йәшәргә теләгәндәр байтаҡ булыуы билдәле.

## КӨНАУАЗ

# БӨГӨНГӨ МЕНӘН ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## иртәгәнде лә ҡайғыртып йәшә



**Бөгөнгө менән генә йәшәргә кәңәш биргән психологтар бар. Йәнәһе лә, ундайҙар башҡаларға ҡарағанда бәхетлерәк, уңышлыраҡ була. Тик түбәндәге ваҡиға шаһиты булғас, был фекергә таянырға ярамағанлығына тағы бер тапҡыр инандым.**

Оҙаҡ ҡына эшһеҙ ултырғандан һуң, элекке бер хеҙмәттәшем, ниһайәт, күңеленә яткан эш тапты. Оҡшаған, тигәс тә, йәш саҡта үҙе һайлаған, уҡыған һөнәре буйынса түгел ине, әлбиттә, ул эш. Иң беренсе уны, билдәле инде, яңы урында эш хаҡы ҡәнәғәтләндерә ине. Документтарын алып, әңгәмәләшеүгә барғас та эш биреүсе: "Хеҙмәт мөнәсәбәттәрен рәсмиләштерәһегеҙме, әллә үҙ-ара килешеү нигеҙендә генә эшләйһегеҙме?" - тигән бер генә һорау биргән. Был ике төр мөнәсәбәттең шарттары менән таныштырған. Хеҙмәт килешеүе төҙөгән осраҡта эш хаҡының икеләтә аҙ, ә рәсмиләштермәгән осраҡта күберәк булыу ихтималлығы тураһында иҫкәрткән. Кредиты булған, балаһын түләп уҡытҡан кешенең ниндәй төрҙә һайлауы билдәле инде: үҙ-ара килешеү төҙөйҙәр ҙә, ҡатын башҡөлләэшкә сума.

Һәр эштең уртаһынан тотоп эшләгән, үҙенә йөкмәтелгән бурысты еренә еткереп үтәгән кешене, әлбиттә, эш биреүсе бик оҡшата. Ай һайын мул ғына премия ла яҙа. Шулай ике йылға яҡын ваҡыт үтә. Әммә берҙән-бер көндө эшкә барған ваҡытта ҡатын йығылып йәрәхәтләнә. Оҙаҡ ҡына дауаханала ятып сыға. Сыҡҡас та өйҙә ултырырға мәжбүр була. Улы-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы үҙенең йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә белдереүенсә, былтыр ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре һөҙөмтәле эшләне, республика Рәсәйҙең игенгә бай төбәктәренең береһе тигән статусын нығытты. Агропродукцияның күләме 177 миллиард һум тәшкил итте. Агросәнәғәт комплексы экспорты бер ярым тапҡырға - 165 миллион долларға тиклем артты. Радий Хәбиров ауылда йәшәүселәрҙең барыһына ла уларҙың хеҙмәте өсөн рәхмәт әйтте.

✓Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты Башҡортостан Башлығы гранты конкурсында күрше төбәктәрҙә Башҡорт йәкшәмбе мәктәптәрен асыу проекты менән еңеү яуланы. Ошо унайҙан Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Булат Зинуров етәкселегендәге делегация Силәбе өлкәһендә район һәм ҡала хакимиәттәре менән осрашыуҙар уҙғарҙы. Ҡыҙыл районында һәм Магнитогорск ҡалаһында йәкшәмбе мәктәптәрен асыу мәсьәләһе тикшерелде.

✓Рәсәйҙең 15 төбәге заманса инфекция үҙәген төҙөү тәжрибәһен өйрәнеү өсөн Башҡортостанға мөрәжәғәт итте. Улар араһында Новосибирск өлкәһе лә бар. Губернатор урынбаҫары Юрий Пехутов етәкселегендәге делегация Стәрлетамаҡтағы инфекция үҙәгендә булды ла инде. "Башҡа төбәктәргә килгәндә, беҙ уларға ла проектты күрһәтергә, төҙөүселәр менән ярҙам итергә әҙер", - тип билдәләне республика Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров.

✓Башҡортостанда COVID-19 йоҡторғандар һаны 25 меңдән артты. Мәғлүмәттәргә ярашлы, 5 февралгә 25 073 диагноз раҫланған. Һуңғы тәүлектә - 164 яңы осраҡ. Хәҙерге көндә ковид-госпиталдәрҙә 343 кеше дауалана, уларҙың 47-һе - ауыр хәлдә, 11-е үпкәне яһалма елләтеү аппаратына мохтаж. 5 472 пациент коронавирус менән өйҙә көрәшә. Бер тәүлектә дауахананан тыш пневмония осрактары - 210.

✓Һауыҡҡандан һуң барлыҡҡа килгән G имунноглобулиндары (антиматдә) көмей башлаһа, йәки кешелә вирустар уның антиматдәләренә ҡарағанда күберәк булһа, яңынан коронавирус инфекцияһын йоҡторорға мөмкин. Өфө профессоры Нәүфәл Заһизуллин билдәләүенсә, сирҙе еңгәндән һуң ваҡыт үткән һайын яңынан ауырыу ихтималлығы арта. Шулай уҡ яңы штамдарҙың барлыҡҡа килеү хәүефе бар. Табип ҡабаттан сирләмәҫ өсөн битлек кейеп йөрөргә һәм прививка яһатырға кәңәш бирә.

*✓ Был күренеш тағы бер тапҡыр башҡорт халҡының ер кешеһе булыуын иҫбатлай. Бер ниндәй социаль объект ҡалмаһа ла, һәүетемсә генә йәшелсә-емеш үҫтереп, ҡош-ҡорт, мал-тыуар аҫрап йәшәүен дауам итә.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Былтыр йыл һуңында республика Башлығы ауылдар яҙмышы, бөлә барған ауылдарҙы тергеҙеү тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Нисек тормошҡа ашырып була ошо бик үк еңел булмаған проектты?**

**Айгөл ҠЫҘРАСОВА, Күгәрсен районы:** Бөлөп барған ауылдарҙы тергеҙеүҙе, иң беренсе, ауыл хужалығын тергеҙеүҙән башларға кәрәк, тип уйлайым. Тап ошо тармаҡ ауыл иҡтисадының нигеҙен тәшкил итә. Онотмаһағыҙ, ауылдарҙың гөрләп йәшәгән мәле, күпләп балалар тыуыуы нәҡ колхоз-совхоздарҙың тулы көскә эшләгән ваҡытына тура килә бит. Социаль учреждениелар ҙа кәрәк, әммә улар менән генә ауылды һаҡлап ҡалып булмай. Иң беренсе, халыҡты эш менән тәьмин итергә кәрәк, тип уйлайым. Ана бит, аҡса эшләйем, ғаиләмде ҡарайым, фатир алайым, йорт һалайым, баламды уҡытайым тигән кеше ер сигенә булһа ла эшкә китә.

Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, элекке колхоздар булмаҫ инде хәҙер, әммә әлеге фермер хужалыҡтары, кооперативтар, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ объекттары, ҙур булмаған ойошмалар асырға мөмкин. Был йәһәттән фермерлыҡты, шәхси эшенде асыуға, үҫтереүгә бәйле төрлө программаларға әләгеү мөмкинлеген ҡарарға кәрәк.

Ауылдарҙа әле лә хужалыҡ эшен белгәндәр бар. Үҙебеҙ етештергәнде үҙебеҙ һатырға, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлекте рекламаларға өйрәнһәк, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, сөнки беҙҙә электән сауҙа итеү үҫешмәне. Дөрөҫөрәге, һатыу-һатыулашыу ярамаған эш һаналды. Был беҙҙең шул тиклем ҡаныбыҙға һеңгән, әле лә үҙебеҙ етештергәнгә, үҫтергәнгә хаҡ һорай белмәйбеҙ. Әммә баҙар иҡтисады шарттарында был шөғөлгә, йәғни һатыу эшенә ихтирам менән ҡарарға өйрәнергә күптән ваҡыт беҙгә.

Төрлө райондарҙа "киләсәкһеҙ" мөһөрө һуғылып, юҡҡа сыҡҡан тыуған ауылын тергеҙеү менән янған шәхестәр хаҡында ишетеп, күреп торабыҙ. Был - бик ҡыуанысла. Кемдер ауылына иман ҡайтһын тип, мәсет төҙөтә, икенсеһе юл һалдыра, өсөнсөһө башҡа социаль әһәмиәтле учреждениеларҙы төҙөкләндерергә бағыусы ярҙамын күрһәтә. Һуңғы йылдарҙа республикала халыҡ байрамы төҫөн ала барған "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамдары ла тораҡ пункттарҙы үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерә, тип уйлайым. "Урындағы башланғыстарҙы хуплау" республика программаһында ҡатнашып та тораҡ пункттарҙы үҫтереү маҡсатында мөһим эш башҡарырға була. Бында Хөкүмәт ярҙамы менән бергә ауыл халҡының үҙенең әүҙемлеге һәм, әлбиттә, башлап йөрөүсеһе, белемле, тырыш ойоштороусыһы кәрәк.

Мин йәшәгән тораҡ пункт тыуған ауылымдан йыраҡ түгел. Тормошҡа сыҡҡас та ошонда төпләндек. Утар тип аталһа ла, заманында ҡатнаш халыҡ йәшәгән ҙур ғына ауыл ине ул. Эшкә һәләтле йәштәгеләрҙең күбеһе сусҡа фермаһында эшләне. Колхоз бөтөп, ферма тарҡалғас, урыҫтарҙың йәшерәктәре бөтәһе лә тиерлек ҡалаға күсте, ә ололары күптән вафат инде. Бөгөн Черниговский утарында, халыҡ уны был исем менән түгел, ә Торай тип йөртә, башлыса башҡорттар ғына йәшәй. Был күренеш тағы бер тапҡыр башҡорт халҡының ер кешеһе булыуын иҫбатлай. Бер ниндәй социаль объект ҡалмаһа ла, бер кем дә күтәрелеп сығып китмәне. Һәүетемсә генә йәшелсә-емеш үҫтереп, ҡош-ҡорт, мал-тыуар аҫрап йәшәүен дауам итә. Үткән йыл ауылыбыҙ аша асфальт юл үтте. Был да беҙгә шатлыҡ өҫтәне. Балаларҙы күрше Теләүембәт ауылы мәктәбенә автобус йөрөтә, медпунктҡа ла шунда йөрөйбөҙ, магазинға ла... Коронавирус таралыу хәүефенә бәйле балалар дистанцияла уҡырға күскәс, иң төп мәсьәлә интернеттың юҡлығы булды. Үҙебеҙ түләп, интернет үткәрергә тура килде. Ауылдарҙы тергеҙеү, үҫтереү еңел эш түгел. Алдан уйланылған программалар, проекттарһыҙ мөмкин дә түгел һымаҡ. Шулай ҙа иң мөһиме - ауылда йәшәргә ҡалырға теләгәндәрҙең булыуы. Ә улар, шөкөр, бар әле...

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ның уҡыуына түләү түгел, үҙенә дарыу алырға ла аҡсаһы булмағас, хеҙмәт килешеүе төҙәмәүенә ныҡ үкенә ҡатын.

- Һәр ваҡыт шулай ал да гөл булыр, тип уйлап яңылышҡанмын, - тине ул. - Бөгөнгө көн менән йәшәргә кәрәк, тиҙәр. Юҡ, был төптә дөрөҫ түгел, киреһенсә, иртәгәнде уйлап йәшәү мөһим. Әгәр ҙә хеҙмәт килешеүен төҙәгән булһам, исмаһам, бөгөн эшкә һәләтһеҙлек буйынса аҡса алыр инем...

Эйе, һуңғы осорҙа формаль булмаған мәшғүллек проблемаһы бар. Иҡтисади көрсөк, конкуренция үҫеше шарттарында эшҡыуарҙарға граждандарҙы рәсми эшкә урынлаштырыу отошло түгел. Шуға күрә, эш биреүселәр һалым түләмәҫ һәм хеҙмәт ҡануниәтендә билдәләнгән бурыстарҙы үтәмәҫ өсөн хеҙмәткәр менән рәсми булмаған килешеү генә төҙөй. Ул быны граждандарға матди яуаплылыҡ тураһында иҫкәртеү маҡсатында ғына эшләй, ә ысынында ул бер ниндәй көскә эйә түгел.

Шуның өсөн эшкә урынлашыр алдынан, иң беренсе, хеҙмәт мөнәсәбәтен рәсмиләштереү тураһында ҡайғыртырға кәрәк. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларында ла йыш иҫкәртелә. Рәсми булмаған мәшғүллекте бөтөрөү һәм хеҙмәт мөнәсәбәтен легалләштереү буйынса талаптар ҡәтғиләштерелһә лә, "күләгә"ләге хеҙмәткәрҙәр һаны кәмемәй.

Хеҙмәт килешеүе төҙәмәйенсә эшләргә риза булып, һеҙ пенсия тәьминәте һәм медицина страховкалау буйынса социаль гарантияларҙан ҡолаҡ ҡағаһығыҙ, стажығыҙҙы юғалтаһығыҙ, түләүле отпускығыҙ, йөклөлөк һәм бала табыу, бала ҡарау буйынса пособиеларығыҙ булмай. Быңдай осраҡта эш биреүсе шулай уҡ хеҙмәткәренең производствола йәрхәтләнеүе менән бәйле бер ниндәй яуаплылыҡ кисермәй.

Рәсми булмаған мәшғүллектең граждандарға ғына түгел, урындағы бюджетты тулыландырыуға ла кире йоғонтоһо ҙур. Шуға күрә, үрҙә атап кителгән ҡатын хәлендә ҡалғығыҙ килмәһә, эшкә урынлашҡанда, тәү сиратта, хеҙмәт мөнәсәбәтен законға ярашлы рәсмиләштереү талабын ҡуйығыҙ.

**Мәрүәр ӘҺЛИУЛЛИНА.**

## БЫНАҒАЙЫШ!



# ТИЛЕНЕКЕ - ТЕЛЕНДӘ

**Заман әҙәбе билдән түбән тәңгәлгә тәгәрәй бара түгелме: кем нимә теләй, шуны эшләй - ҡулы ни ҡылғанды, ауыҙы ни һөйләгәнде белмәй башланы берәүҙәр.**

Әле генә яңъялсы һүрәт төшөрөүсе яланғас тән темаһы менән мауығып, енси нәфсеһен бар гәмгә фаш итһә, тағы бер "кадровый" яңъялсы илдең юғары закон сығарыу палатаһында фәхишәләр хаҡында төш күреп һаташыуын бөтөн илгә иғлан итте. Урыҫ белмәй әйтмәгән шул: "Седина в бороду - бес в ребро". Ярай инде, һикһәнде ваҡлаған был әҙәмдә һаҡал да, аҡыл да юҡ икән, ти. Был салланып бөткән ҡартлас-депутаттың билдәле бер миҙгелдә өйәнәгә тотоп алыуын былай ҙа беләбеҙ, ләкин йәштәрҙе... фәхишә йорто ярҙамында тәрбиәләргә саҡырыуы "миҙгел сире" эйәһен барыбер аҡламай. "Эхо Москвы" каналына ла, "Комсомольская правда" гәзите радиоһына ла биргән интервьюһында депутат хәҙерге йәштәрҙең, ә был осраҡта протест белдереп митингыға йәлеп ителгәндәрҙең күпселеге өйләнмәгән кешеләр һәм улар көстәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәгәнлектән урамға сыҡҡан, тип иҫәпләй. "Фәхишә йорто асыу йәш кешеләрҙең агрессияһын ике-өс тапҡырға кәметер ине. Был тәҡдимде тауышҡа ҡуйһаҡ, иманым камил, 30 процент тауыш биреүсе уны яҡлаясаҡ. Әйҙәгеҙ, бөтөн ҙур ҡалаларҙа ла фәхишә йорттары асайыҡ!" - Жириновскийҙың оятһыҙ рәүештә етди ҡиәфәт менән әйтелгән был һүҙҙәрен интернет блогерҙары бик тиҙ эләктереп алды. Асыу һәм нәфрәт менән улар депутатҡа ябырылды. "Депутат халыҡтың, шул иҫәптән йәштәрҙең ниндәй маҡсат менән урамға сығыу сәбәптәрен белмәй һәм белергә лә теләмәй, ахыры. Беҙгә эш урындары, лайыҡлы эш хаҡы, пенсия һәм тормош кимәле - ҡыҫҡаһы, социаль ғәҙеллек кәрәк", тип яҙа, мәҫәлән, үҙенең сәхифәһендә Валентина исемле йәш кеше һәм был депутат үҙенең тәҡдиме менән халыҡты хайуани затҡа тиңләп, уны кәмһетте, тип билдәләй.

"Берҙәм Рәсәй" партияһында тороуына ҡарамаҫтан, Жириновский ише "үҙенсәлекле" сығыштары менән билдәле депутаттарҙың береһе Виталий Милонов, ғәжәпкә күрә, әлеге ауырыу ҡарашты уртаҡлашмаһа ла, өлкән дуҫына ярҙамға ашыҡты: "Владимир Вольфович, һис шикһеҙ, илебеҙҙәге талантлы һәм бик тәжрибәле сәйәсмән, - ти ул Крылов басняһындағы Әтәс менән Кәкүкте хәтерләтеп. - Мин йәштәрҙең энергияһы тейешле ҡулланылмауы менән килешәм. Ләкин һатлыҡ мөхәббәт яҡшыға алып килмәйәсәк, - тип, ниһайәт, йүнле фекер әйтергә баҙнат итә был депутат. Тик артабан ул да яңы БАМ, яңы Транссиб асырға, яңы сиҙәм күтәрергә, урман ҡырҡырға кәрәк, тип тәрбиә темаһына һаташыуҙы дауам итә. Йәштәргә заманса тәрбиә биреү мәсьәләһен бына шулай күҙ алдына килтерә бөгөн ҡайһы бер депутаттар. Ә йәштәр үҙҙәре был турала ни уйлай икән?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ковидҡа ҡаршы йомшартыуҙар тураһындағы ҡарарҙа билдәләнеүенсә, Башҡортостанда төнгө клубтарға, бар-ресторандарға эшләргә рөхсәт ителде. Шулай уҡ дискотекалар һәм туйҙар уҙғарырға мөмкин. Бынан тыш, "Юғары әҙерлек" режимы тураһында указға төрлө майҙансыҡтарға тамашасыларҙы индереү хаҡында үҙгәрештәр бар. Әйтәйек, хәҙер кинозалдарға - 75 процент, ә урамдағы концерттарға 85 процентҡа тиклем билет һатырға мөмкин. Шулай уҡ студенттар офлайн уҡый башлай.

✓Башҡортостан Италия менән сауҙа һәм туристик хеҙмәттәшлек тураһында һөйләшеп килеште. Республика Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров Итало-Рәсәй сауҙа палатаһы президенты Трани Винченцо менән осрашыуҙан һуң ошо хаҡта белдерҙе. Уның хәбәр итеүенсә, һуңғы ете йылда яҡтар араһында тышҡы сауҙа әйләнеше кәмеһә лә, быйыл Башҡортостандан Италияға экспорт артҡан. Билдәләнеүенсә, яҡтар туристик ағымды киңәйтеү хаҡында килеште. Республика эшҡыуарҙары, үҙ сиратында, Италияла махсуслаштырылған күргәҙмәләрҙә бушлай ҡатнаша ала.

✓Байрам алдынан рәсәйҙәргә алты көн эшләргә кәрәк. "Биш көнлөк эш аҙнаһында 23 февралдәге байрам эш аҙнаһын өс көнгә - 24 февралдән 26-һына тиклем ҡыҫҡарта. 21-23 февралдә ял итәбеҙ. 22 февралдәге эш көнөн шәмбе 20 февралгә күсереүгә бәйле өс көнлөк ял иғлан ителде", - тиелә Мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт белдереүендә. Быйыл бөтәһе ете ҡыҫҡа эш аҙнаһы була. Уларҙың һуңғыһы кесәҙнә 30 декабрҙә тамамлана.

✓Республика дауаханаларында коронавирус инфекцияһын йөкторғандар өсөн койкалар һанын кәметеү эше дауам итә. Әйтәйек, 1 февралдән Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында, Өфөнөң Ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһында ковид-госпиталдәр профилле йүнәлеш буйынса эшләй, Салауат һәм Октябрьский ҡалаларында инфекция үҙәктәре ябылды. "Кәрәк булһа, 24-48 сәғәт эсендә беҙ уларҙы йәнә ойоштора һәм инфекцияны дауалау өсөн файҙалана алабыҙ", - тип хәбәр итте Максим Забелин.

✓ *Пандемия арҡаһында кире иҡтисади процестарҙы тигеҙләүгә бәйле булмаған закондар иҫәбендә - баҡсасыларға дәүләт ярҙамы, йәнлектәргә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт, балалары булған ғаиләлә ташламалар тураһында.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МАЛДАРҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**БР Ветеринария идаралығы начальнигы Азат Йыһаншин республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә йоғошло ауырыуҙар таралыу хәүефе менән көрәш хаҡында һөйләне.**

Мәҫәлән, 2020 йылдың һуңғы кварталынан алып күрше төбәктәрҙә сусҡаның Африка тағуны һәм ҡош киҙеүе кеүек йоғошло сирҙәр буйынса хәл-торош үтә шөптән түгеллеген билдәләп: "Был ауырыуҙар ауыл хужалығы өсөн ҙур иҡтисади зыян килтерә. Сирләү осраҡтары көнбайыштан, көньяҡтан һәм көнсығыштан беҙҙең сиккә ныҡ яҡынайҙы, - тине Азат Йыһаншин. - Һамар өлкәһендә сусҡаның Африка тағуны менән бәйле хәлдең контролдән сығыуы уның артабан таралыуына булышлыҡ итте. Хәҙер вирус ҡырағай фаунаға күсте.

Республиканың Ветеринария идаралығы тәбиғәтте һәм хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәттәре менән берлектә Башҡортостанға ингән урында ветеринария-патруль постары ҡуйҙы, ҡабан сусҡаһын атыуға өҫтәмә 50 лицензия бирҙе. Әлеге ваҡытта республикала ауырыу йоҡтороу осрағы теркәлмәгән".

Башҡортостан Башлығы иғтибарҙы Африка тағуны менән бәйле хәлде контролдә тотоуға һәм Әлшәй, Бүздәк, Бәләбәй, Шишмә районларында ҡабан сусҡаларының һанын көйләүгә йүнәлтте. "Хәүефле мал ауырыуҙарын республикаға үткәрмәгәне өсөн Идаралыҡ коллективына рәхмәт белдерәм, - тине Радий Хәбиров. - Беҙҙең эргәлә, башҡа төбәктәрҙә төрлө сирҙәр теркәлә, ә беҙ әлегә бирешмәйбеҙ..."

# ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРГӘН - ҮҘЕБЕҘГӘ

**БР Ветеринария идаралығы мәғлүмәте буйынса, Башҡортостанда былтырғы уҡыу йылында балалар туҡланыуында урында етештерелгән һыйыр ите өлөшө 11 тапҡырға артҡан.**

2018-2019 уҡыу йылында мәктәп туҡланыуына республика хужалыҡтарынан килтерелгән һыйыр ите ни бары 7 процент, импорт продукция - 10 процент, Рәсәй төбәктәренән 83 процент тәшкил иткән. 2019-2020 уҡыу йылында башлыса Башҡортостанда етештерелгән һыйыр ите ҡулланылған, башҡа субъекттарҙан - 23 процент. Сит илдән һатып алыу бөтөнләй туҡтатылды. Был темаға республика Башлығы Радий Хәбиров айырым иғтибар бирҙе. Малсылыҡ үҫешкән төбәк мәктәп ашханаларын тулыһынса үҙебеҙҙең ит менән тәьмин итә алаҫаҡ, тип билдәләнә ул.

"Быйыл ветеринар күҙәтеүе өсөн яңы ҡорамал һатып алынды, ит һәм ит аҙыҡтарын тикшереү буйынса яңы лаборатория асылды, унда ҡыҫҡа ваҡытта заманса экспресс-приборҙарҙа иттең сифатын билдәләп, һәр төрлө анализдар эшләп була", - тине БР Ветеринария идаралығы етәксеһе Азат Йыһаншин. Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәте буйынса, 2020 йылда Башҡортостанда ит етештереү 410 мең тоннаға тиклем артты, һыйыр ите етештереү буйынса илдә алдынғы позиция һаҡланды, шулай уҡ сусҡа ите етештереү ҙә артты.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# СОВЕТ СОСТАВЫНДА...

**Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе, Рәсәй башҡорттарының федераль милли-мәҙәни автономияһы советы рәйесе Лилиә Ғүмәрова РФ Президенты ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет составына инде.**



Совет рәйесе - Президент үҙе, составына РФ Президенты Хакимиәте, Федерация Советы, Дәүләт Думаһы, федераль министрлыҡтар, ведомстволар, йәмәғәт берекмәләренең милли-мәҙәни автономиялары, фәнни һәм башҡа ойошмалар вәкилдәре ингән. Совет Рәсәй Президенты ҡарамағындағы кәңәшмә һәм консультатив орган булып тора һәм милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен камиллаштырыу, өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе билдәләү буйынса Президентҡа тәҡдимдәр әҙерләү маҡсатында булдырылған. "Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанға бер килгәнендә былай тигәйне: "Башҡортостанда, һыу тамсыһындағы һымаҡ, мәҙәниәт, дин, тел төрлөлөгө һәм халыҡтар дуҫлығы менән бергә Рәсәй тарихы сағыла". Бөгөн ошо йүнәлештә эш, ысынлап та, бик мөһим. Мәҙәниәтте, милли сәйәсәтте үҫтереү, телдең күп төрлөлөгөн һаҡлау РФ Конституцияһы менән нығытылған. Хәҙер башҡорттарҙың федераль милли-мәҙәни автономияһының юғары кимәлдә үҙ проектын һәм тәҡдимен индерә алыу мөмкинлегенә эйә булыуы, әлбиттә, бик яҡшы. Баштан уҡ беҙ "Беҙҙең көсөбөҙ берҙәмлектә, ә берҙәмлегебеҙ - күп төрлөлөктә" девизына таянып эшләнек. Беҙҙең автономия дөйөм федераль бурыстарға әүҙем ҡушылыр, милләт-ара татыулыҡты нығытыу, Рәсәй Федерацияһының сәскә атыуы буйынса дөйөм эшкә үҙ өлөшөн индерер, тип ышанам", - тине сенатор.

# ИМТИХАНДАР ҠАСАН?

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы, Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәте 2021 йылда 9-сы һәм 11-се кластарҙың Берҙәм дәүләт имтиханын, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын уҙғарыу тәртибе тураһында иғлан итте.**

Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына инергә йыйынған уҡыусылар өсөн Берҙәм дәүләт имтиханының төп этабы 31 майҙан 2 июлгә тиклем, ә өҫтәмә осоро 12-17 июлдә үткәрелә. Был турала Мәғариф министрлығы башлығы Сергей Кравцов белдерҙе. 2021 йылда ағымдағы эпидемик хәлгә бәйле 11-се кластар һәм Берҙәм дәүләт имтиханының башҡа ҡатнашыусылары, шулай уҡ 9-сы кластар өсөн дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын ваҡытынан алда уҙғарыу осоро булмай. Юғары уҡыу йортона инергә йыйынмаған сығарылыш класы уҡыусыларына Берҙәм дәүләт имтиханы урынына рус теленән һәм математиканан дәүләт сығарылыш имтиханын тапшырырға кәрәк. Быйыл база кимәлендәге математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы булмай. 11-се кластар өсөн Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашырға мөмкинлек биргән йомғаҡлау иншаһы һәм изложение апрель уртаһында үткәрелә.

9-сы кластарға төп дөйөм белем тураһында аттестат ике мотлаҡ фән - рус теле һәм математика буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы һөҙөмтәләре нигеҙендә бирелә. 2021 йылда 9-сы класты тамамлаусылар төп дәүләт имтиханында һайлау буйынса уҡыу предметтарын тапшырмай. Рус теленән һәм математиканан дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы 2021 йылдың 24-28 майында үтә.

# ЗАКОНДАР БАР УЛ...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы 2020 йылда 150-нән ашыу закон ҡабул итте, шуның 60-ҡа яҡыны - көҙгө сессияла.**

"Былтыр беҙҙең күп башланғысыбыҙ пандемияға бәйле имен булмаған шарттарҙа граждандарға һәм иҡтисадҡа ярҙам итеүгә йүнәлтелде. Иҡтисадты тотороҡландырыуға йүнәлтелгән закондарҙың беренсе блогын беҙ апрелдә үк ҡабул иттек. Көҙгө сессияла парламент граждандарға һәм эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү буйынса тағы ла көсәйтте. 50-нән ашыу тармаҡты милеккә һалымдан азат иткән закондар ҡабул ителде. Ҙур сауҙа үҙәктәренә ошондай ярҙам ҡүрһәтелде. Шул уҡ ваҡытта уларға эш урынын һәм эш хаҡы кимәлен һаҡлау шарты ҡуйылды. Шуның менән бергә бизнесҡа ла, граждандарға ла ярҙам иттек", - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев йомғаҡлау матбуғат конференцияһында.

Ул шулай уҡ депутаттарҙың үҙмәшғүлдәргә бәләкәй һәм урта бизнес өсөн булдырылған ярҙамдың бөтә төрөнә хоҡуҡ биргән закон ҡабул итеүен иҫкә төшөрҙө. Бында һүҙ льготалы кредит, субсидия һәм башҡалар тураһында бара. "Пандемия шарттарында үҙенә эшләгәндәргә был яҡшы ярҙам һәм үҙенең килемен легалләштереү өсөн өҫтәмә этәргес булып тора, - тип иҫәпләй парламент рәйесе. - Көҙгө сессия барышында беҙ шулай уҡ "Алға" айырым иҡтисади зонаһы предприятиелары өсөн һалым льготаһы билдәләнек - биш йылға килемгә һәм транспортҡа һалымды түләүҙән азат иттек".

Пандемия арҡаһында кире иҡтисади процестарҙы тигеҙләүгә бәйле булмаған закондар иҫәбендә - баҡсасыларға дәүләт ярҙамы, йәнлектәргә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт, ике һәм күберәк балалары булған ғаиләләргә кесе балаға мәктәп һайлағанда ташламалар тураһында.

Константин Толкачев республика парламентарийҙары йыл дауамында федераль закондарҙы камиллаштырыу өҫтөндә лә әүҙем эшләүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Беҙ оло граждандар өсөн пансионаттар эшмәкәрлеген мотлаҡ лицензиялауҙы индереү, алдан иҫкәртмәйенсә умарталыҡ янында пестицид һәм агрохимикат ҡулланған өсөн яуаплылыҡ билдәләү, торлаҡ тәҙрәләренә өлөш индергәндәрҙең хоҡуғын яҡлау, күсмә циркттар, зоопарктар һәм дельфинарийҙар эшмәкәрлеген туҡтатыу, иҫерек килеш йөрөткән өсөн автомобилде конфискациялауҙы индереү буйынса федераль закон проекттарын әҙерләнек. Ошо һәм башҡа инициативаларҙы илдең парламентында хуплаҙар, тип өмөтләнәбеҙ", - тине Константин Толкачев.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мэрияһы 2021 йылда ауыл хужалығы һәм тематик йәрминкәләрҙе уҙғарыу графигын раҫланы. Документҡа ярашлы, баш ҡаланың бөтә райондарында ауыл хужалығы йәрминкәләрен ойоштороу өсөн 12 майҙансыҡ билдәләнгән. Әйтәйек, 6, 13, 20 һәм 27 февралдә, шулай уҡ 6 һәм 13 мартта Өфөнөң бер нисә районында ит йәрминкәләре уҙғарыла. "Бөтәһе лә баҡса өсөн" яҙғы йәрминкәләр 24 апрелдә, 1, 2 һәм 8 майҙа була. 12 июндә Рәсәй көнө һәм Өфө ҡалаһы көнө уңайынан бер ауыл хужалығы йәрминкәһе үткәрелә. "Еләкле тырыз" йәрминкәләре 10, 17 һәм 24 июлдә була.

✓Роспотребнадзорҙың республика идаралығы белгестәре һуңғы ике аҙнала Башҡортостандың баш ҡалаһында киҫкен респиратор вирусы инфекция йоҡтороусылар һаны артыуын теркәй. Шул уҡ ваҡытта, ведомство күҙәтеүе буйынса, дауахананан тыш пневмонияның яңы осраҡтары кәмей. Идаралыҡ етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина һүҙҙәренсә, кәмеү 9 процент тәшкил итә. Әлегә Өфөлә грипп вирусы асыҡланмаған.

✓Австрияның Инсбрук ҡалаһында скелетон буйынса Донъя кубогының йомғаҡлау этабында Башҡортостан вәкиле Александр Третьяков алтын миҙал яуланы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2010 йылда Ванкуверҙа уҙған XXI Олимпия уйындарында Александр Третьяков бронза миҙал алды һәм ватандаштарыбыҙ араһында ошондай ярыштарҙа тәүге призер булды. Ул 2020 йылдың декабренән Башҡортостан өсөн сығыш яһай.

✓Өфөнөң "Гастелло" спорт клубының 10 йәшлек тәрбиәләнеүсеһе Рамазан Хәйбуллин шахбокс-фит буйынса Рәсәйҙең онлайн чемпионатында еңеү яуланы. Ярышта илдең 17 төбәгенән 67 шахбоксер ҡатнашты. Команда зачетында беренсе урынды Санкт-Петербург вәкилдәре алды, икенсеһе - Силәбе, өсөнсөһө - Амур өлкәһе спортсылары. 2020 йылдың йәйендә республикала Шахбокс федерацияһы ойоштороуы тураһында хәбәр ителгәйне. Шахбокс - боксты һәм шахмат уйынын берләштергән спорт төрө.

✓Февралдең икенсе аҙнаһы башында, 7 февралдән, Өфөлә һыуыта башлай. Көндөҙ - минус 10-дан саҡ ҡына юғарыраҡ, төндә 5-7 градусҡа һалҡынырыраҡ була. Республикала ошондай һауа тороошо һуңғы ҡыш айының уртаһына тиклем һаҡлана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Иртәнге 6-нан киске 10-ға тиклем ваҡыт арауығында ауыл араһында һәм туҡталыштарҙан тыш, тышта 20 градус һәм унан да түбәнерәк булғанда билетһыҙ балаларҙы транспорттан төшөрөп ҡалдырыу тыйыла.



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ...



**Ҡала хакимиәтендә кәңәшмә булыуын белгәндәй, иртәнән көн боҙолоп, ҡар яуып, буранлап торҙо. "Эх, ғинуар булһам, һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем", - тип күпме генә туҙынмаһын февраль, көнәлдәрҙә барыбер яҙ һулышы. Сананы йәй әҙерләп ҡуйған кеүек, тимәк, арба әҙерләргә лә һуңға ҡалырға ярамай. Хакимиәттең яуаплы кешеләре яҙ-көҙ миҙгелендә генә башҡарыласаҡ эштәрҙе күҙаллай ҙа инде. Көн тәртибенә 2021 йылда урам-юл селтәрен ремонтлау пландары мәсьәләһен сығарыу ҙа быны раҫлай. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Радмил Мөслимов бәйән итте.**

Атап әйткәндә, быйыл "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты һәм Башҡортостан Республикаһының Территориаль заказы сиктәрендә дөйөм оҙонлоғо 19 километр булған тугыҙ юл участкаһын, шул иҫәптән Әрмән, Ветошников, Выгонная, Николай Дмитриев, Район, Эшселәр, Ухтомский, Алексеевкий урамдарын һәм Нуғай шоссеһын ремонтлау планлаштырыла. Ниһайәт, былтыр башланған Өфө - Нуғай юлын ремонтлау тамамланасаҡ, башҡа урамдарҙа ла эш ахырына еткереләсәк. Республиканың территориаль заказы буйынса 17,7 километр оҙонлоғонда дүрт объектты, йәғни Сәғит Агиш урамынан Энтузиастар урамына тиклем Менделеев урамын, Черкассы - Чуварез - Покровка автомобиль юлын, Юбилей һәм Кислород урамдарын ремонтлау күҙаллана. Черкассы - Чуварез - Покровка автомобиль юлы дүрт ауылды бәйләп тора, уларҙа барлығы мендән ашыу кеше йәшәй. Әлегә тиклем бында юлдарҙың торошо ҡәнәғәтләнерлек булмай, бары тик былтыр ғына ремонтҡа тотонорға мөмкинлек тыуа.

Мәғлүм булыуынса, йылылыҡ менән тәьмин итеүҙә яңыса тұләү системаһына күсеү халыҡ өсөн дә, етәкселек өсөн дә көтмәгәндә башҡа яуған ҡар кеүек булды. Түләүҙәрҙең бер нисә тапҡырға артыуы йәмғиәттә ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырҙы, халыҡты урамға сығырға мәжбүр итте. Ахырҙа, мәсьәләгә республика Башлығы үҙе ҡыҫылып, һәр район буйынса күп фатирлы йорттарҙа үткәрелгән тикшереү һөҙөмтәһендә декабрҙә түләүҙәр ноябрҙәгенән 42 проценттан күберәккә артыҡ булған осраҡта, уларҙы ҡайтанан иҫәпләп, артыҡ түләнгән аҡсаны кире ҡайтарыу бурысы йөкмәтелде. Тап ошо ҡабаттан иҫәпләүҙәр буйынса хәл-торош менән "Өфө инженер селтәрҙәре" МУП-ы генераль директоры Максим Петров, "ЕРКЦ" МУП-ы генераль директоры Айгөл Винникова таныштырҙы. Максим Петров белдереүенсә, өс көндә уларға 10 мендән ашыу ғариза килә. Ойошма барлығы 20 мең ғариза һәм улар буйынса 35 миллион һум аҡса кире ҡайтарылыу ихтималлығын күҙаллай. Ғаризалар 15 мартҡа тиклем ҡабул ителә, март һуңында иһә барлыҡ түләүҙәр тамамланырға тейеш. Сығышы һуңында Максим Петров киләсәктә бындай хәл ҡабатланмаһын өсөн РФ кимәлендә йылылыҡ менән тәьмин итеү сығанаҡтарында үҙәкләштерелгән тәьминәт тәртибен көйләү буйынса норматив базаның булмауын билдәләп, төбәк кимәлендә ошо тәртипте, температура графигын һәм йылылыҡ менән тәьмин итеү режимын эшләп раҫлау зарурлығын белдерҙе.

ЕРКЦ МУП-ы генераль директоры Айгөл Винникова 26 ғинуарҙан 1 февралгә тиклем ойошмаға 1540 мөрәжәғәт килеүе тураһында һәм ҡайтанан иҫәпләүҙәр буйынса көсөргәнеш артыуы һөҙөмтәһендә ғинуарҙа техник хата китеүен билдәләп, УИС МУП-ы хеҙмәтләндергән территорияның ҡайһы бер йорттарында түләү документтары ҡабаттан баҫыласағын, әгәр түләү башҡарылып өлгөрһә, ул ҡабаттан иҫәпләнеп, артыҡ түләү иҫәпкә алынасағын белдерҙе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӨШӨРӨП ҠАЛДЫРҺАҢ...



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары 16 йәшкә тиклемге балаларҙы автобуста йәки ҡала электр транспортында билетһыҙ йөрөгәне өсөн төшөрөп ҡалдырыуҙы тыйған закон проектын тикшерҙе.**

"Был ҡағиҙә бала янында оло кеше булмаған һәм билдәле ваҡиғалар осрағында ғына көсөндә. Атап әйткәндә, иртәнге 6-нан киске 10-ға тиклем ваҡыт арауығында ауыл араһында һәм туҡталыштарҙан тыш, тышта 20 градус һәм унан да түбәнерәк булғанда һәм башҡа хәүефле тәбиғәт шарттарында билетһыҙ балиғ булмаған балаларҙы транспорттан төшөрөп ҡалдырыу тыйыла. Был закон проекты билетһыҙ йөрөүҙе хуплау түгел, ә балаларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн тәҡдим ителә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балаларҙы һыуыҡта, трассала, ҡаланан алыҫта транспорттан төшөрөп ҡалдырыу осраҡтары булды. Бындай хәлдәрҙең оло бәләгә килтереүе мөмкин", - тип белдерә Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Дәүләт Думаһында шулай уҡ эргәһендә оло кеше булмаһа ла билет алмай йөрөгән 16 йәшкә тиклемге пассажирҙарҙы төшөрөп ҡалдырыуҙы ҡараған закон проекты тикшерелә. Ул былтыр июндә тәүге уҡыуҙа уҡ ҡабул ителһә лә, уның буйынса эш туҡтап ҡалды. Дәүләт Йыйылышы рәйесе республика законы ҡабул ителгәндән һуң уның үтәлешен ныҡлы күҙәтеү һәм уны ҡулланыу тәжрибәһен анализлау мөһим, тип билдәләне. "Бер яҡтан, пассажир ташыусыларҙың был норманы үтәүен талап итергә кәрәк, - тине Константин Толкачев. - Икенсе яҡтан, хоҡуҡты артыҡ ҡулланыуға ла юл ҡуймау мөһим. Балалар төрлө сәбәп менән билет алмаҫҡа мөмкин. Закон ҡабул ителгәс, үҫмерҙәр араһында юрый билет алмай йөрөүселәр ҙә табылыр. Бындай осраҡтарға юл ҡуйылмаҫҡа тейеш. Баланы төшөрөп ҡалдырыуҙы тыйыу ата-әсәләрҙе штраф түләүҙән ҡаса ала тигәнде аңлатмай".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АСЫҠЛЫҠ ИНДЕРЕЛДЕ

**Орджоникидзе һәм Калинин районларында сәнәғәт зонаһы территорияһы сиген билдәләү проекты буйынса ҡала Советы иғлан иткән йәмәғәт тыңлауҙары тураһындағы мәғлүмәттән һуң Максимовка һәм Тимашево ҡасабаларында йәшәүселәр шау-шыу ҡуптарҙы һәм яңы зыярат төҙөү планынан баш тартыуҙы талап итте.**

Ҡала хакимиәте иһә был мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп, зыяраттың, ысынлап та, буласағы, әммә ул ҡасабаларҙан етерлек кимәлдә алыҫта урынлашасағын белдерә. Проект буйынса ул 645 гектар ерҙе биләргә тейеш һәм уның эсенә 19,6 гектар майҙанда урынлашҡан Төньяҡ зыяраты, шулай уҡ урман, яландар, баҡса участкалары, мәсет һәм сиркәү, урам сауҙаһы павильондары инә. Шулай уҡ проект Тимашево юлын зыяратҡа барыусыларҙан буштыу өсөн Бөрө трактынан урау юл һалыуҙы күҙаллай. Иң мөһиме - Төньяҡ һәм Төньяҡ-2 зыяраттары киңәйтелмәйәсәк, яңы зыярат әлегеһенән километр ярым төньяҡтараҡ, йәғни Тимашевонан - өс ярым, Максимовканан дүрт километрҙан арыраҡ буласаҡ. Ямғыр һәм ирегән ҡар һыуҙары канализацияға ағып төшөп, таҙартыу ҡоралмалары булған резервуарға йыйыласаҡ, шулай уҡ уларҙың юлын юлдар быуып торасаҡ, йәғни улар кеше йәшәгән урынға аҡмаясаҡ. Бынан тыш, Тимашево һәм Максимовка үҙәкләштерелгән һыу сығанағына тоташтырылған, улар зыяраттан алыҫта урынлашҡан, шуға яңы зыярат эсәр һыу сифатына бер нисек тә йоғонто яһамаясаҡ.

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ДӘРЕСТӘРЕ

**Өфө ҡалаһының белем биреү ойошмаларында "Минең Рәсәйем" тип аталған йәмғиәтте өйрәнеү дәресе үтте.**

Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова билдәләүенсә, бөгөн балалар һәм ата-әсәләр үҙҙәренең конституцион хоҡуҡтарын белергә тейеш. Шуға ла баш ҡаланың барлыҡ мәктәптәрендә лә "Минең Рәсәйем" тип аталған яңы проект башлана. Ул 7-11-се синыфтар өсөн йәмғиәтте, тарихты өйрәнеү буйынса тематик дәрестәрҙе, класс сәғәттәрен үҙ эсенә ала. Дәрес барышында уҡыусылар үҙҙәренең Рәсәй Федерацияһының Төп Ҡанунында ныҡытылған хоҡуҡтары һәм бурыстары, Балалар хоҡуҡтары тураһында конвенция, РФ административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексы, шулай уҡ РФ Енәйәт һәм Ғаилә кодексы менән таныша. Дәрестәр һәр мәктәптә ғәмәлдәге дәрестәр теҙмәһенә ярашлы үтәсәк. Улар балаларҙа фекерләүҙең рациональ алымдары һәм ысулдарын формалаштырырға, таныш белеүҙе, иғтибарҙы, телмәр, тәртип мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Класс сәғәттәре балаларҙың хоҡуҡи мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелә һәм улар уҡыу йылы дауамында үткәреләсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Астма

❖ 100 роза тажы, 500 грамм сей көйөнсә ҡырылған ҡабаҡ, ваҡлап туралған 5 юл япрағы, 2 ҡалаҡ бал, 1 литр ҡыҙыл ҡоро шарап. Барыһын да бергә ҡушып, ҡайнар хәлгә еткерергә, әммә ҡайнатмаҫҡа. Бер тәүлек төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Кизеү

❖ Ҡабығы әрселмәгән ярты лимон, 7 бүлкә һарымһаҡты ваҡ ҡына итеп турап, ярты литр ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм 4 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Шунан һыуытҡысҡа алып ҡуйырға. Иртәнсәк ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡарағат, ҡурай еләгенә 100 мл ҡайнар һыу ҡойорға. 15 минут тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

## Стресс

❖ Эске көсөргәнештән бушаныу һәм тынысланыу өсөн 2 ҡалаҡ ваҡланған мелисса япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Һөҙөп алынған шамаһынан көнөнә 1-3 тапҡыр боҫлама яһарға була.

## Ҡауаҡ

❖ Баш тиреһе кипһә, ҡауаҡ булғанда тигеҙ миҡдарҙа алынған календула төнәтмәһе һәм кастор майын һөртөргә.

❖ 30 грамм шафталы (персик) йәки башҡа төр үҫемлек майын 20 грамм кастор майына ҡушып, 15 грамм одеколон һәм 1 балғалаҡ лимон һуты өҫтәргә. Ошо әҙерләмәне кипкән сәстәргә һөртөргә. Был бигерәк тә баш тиреһе ҡоро себорея сиренә биреше‌үсән булғанда файҙалы.

## Сөйәл

❖ 3 тәүлек дауамында иртәле-кисле аяҡтағы сөйәлгә тирә-ягына саҡ ҡына сығарып йод һөртөргә. Өсөнсө тәүлегенә кискеһен 3 литр һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалырға һәм аяҡтарҙы 10 минут тығып ултырырға. Ебегән сөйәлде иплән кенә пемза ярҙамында ҡырырға. Был ысул менән подагра ороһон һәм үксә тибенгеһен дә бөтөрөргә була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Һарыҡтарҙың ябаға йөнөн (яҙғы йөн) ҡулланғандар. Ҡайһы бер айырым өйбәрҙәрҙе эшләгәндә аҡ йөнгә өҫтөнлөк биргәнгән, мәҫәлән: байрамса өҫ кейемен, баш кейемен, туй сергеләрен һ.б. Дөйәләрҙең муйын һәм йөш малдың ҡабырға тирәһенән ебәк кеүек йөнөн тарап алғандар. Мәллә баҫҡанда оло дөйә малының муйын һәм үркәсендәге оҙон йөнө ҡулланылған. Йөндө ҡул менән теткәндәр, ҡайһы осраҡта махсус тараҡ ярҙамында ла сүптән таҙартып, иләү өсөн ҡолға, орсоҡ ҡулланылған. Күсмә тормош шарттарында тышта йә тирмә эсендә иләгәндәр, йөндө вертикаль беркетелгән ҡолғаға бәйләгәндәр. XX быуатта ҡайһы бер туҡыусылар күп йөндө эшкәрткәндә тәгәрмәсле еп иләү машинаһы менән эшләгәндәр. Әҙер епте ус, терһәк йәки тубыҡтар аша баҫмаға - бер төрлө оҙонлокта итеп 30 тапҡыр уратып, көләпкә һалынған (аяҡланған) еп - йыйғандар. Шул көйө уны һелтеле һыуҙа йыуып, кәрәк булһа ағартҡандар йәки буяғандар. Туҡыған да һәм бәйләгәндә тәбиғи төҫтәге йөн еп ҡулланыу традицион һаналған. Йыуылған епте йомғаҡлағандар һәм ҙур орсоҡ ярҙамында ике ҡат итеп сираттандар; һирәк осраҡта туҡығанда бер ҡат еп ҡулланғандар. Еп урағанда, бигерәк тә буйғау (буй еп - основа) әҙерләгәндә туҙ һәм ағас көтүк йәки остары асалы таяҡ файҙаланылған. 1908 йылда Д. Месарош Мөхәмәткол ауылында (Силәбе өлкәһе) һатып алған еп урай торған әүернә Будапешттағы Венгр этнография музейында һаҡлана.



Еп урау өсөн әүернә

Йөн әйбер һуҡҡанда арҡау ебен ҙур булмаған йомғаҡтарға урағандар. Н. В. Бикбулатов асыҡлауынса, торлаҡ диуарын файҙаланып буйғау оҙатыуҙы бөтә башҡорт ауылдарында ла белгәндәр, әммә Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында һәм Урал аръяғында был бер-бер ысул булған. Көньяҡ-көнбайышта тырма - тешле оҙонса рам формаһындағы станок - ҡулланғандар.



Торлаҡ диуарын файҙаланып, буйғау оҙатыу

Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ЕЛЛЕ ЫРЫУ, ДАНЛЫ ЫРЫУ ЕЛДӘКТӘР

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт тарихы йылын Ырыуҙар йыйыны тип аталған яңы проект менән башланы. Тәүге сара 29 ғинуарҙа Борай ауылында ойошторолдо.**

Тарих төпкөлөнә күҙ һалһаҡ, заманында Борай Башҡортостандың иң ҙур башҡорт ауылы була - унда 5 мең самаһы башҡорт йәшәй (әлеге ваҡытта республикала иң ҙур башҡорт ауылы тип һаналған Сәйетбабала 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа 2452 кеше теркәлгән). Бөгөн елдәктәр Башҡортостандың ете районында, аныҡлап әйткәндә, Борай районының Борай, Дүсмәт, Иҫке Мостафа, Камилән, Сармаш, Үтәгән, Шишмә-Борай, Яңы Йәлдәк, Яңы Мостафа, Дүртөйлө районы Арғымаҡ (1989 йылдан Дүртөйлө ҡалаһы составында), Вәнеция, Гәбләкәсәк, Иҫке Солтанбәк, Йүкәлекүл, Ҡаҙы-Йәлдәк, Наҙытамаҡ, Солтанбәк, Тамаҡ, Түбәнге Ҡарғауыл, Түбәнге Мансар, Түбәнге Аташ, Үрге Ҡарғауыл, Һыуыҡкүл, Илеш районының Бишҡурай, Иләкшиҙе, Кесе Бишҡурай, Сүлтә, Ташшишмә, Төйләгән, Үрге Мансар, Ҡариҙел районының Сиҙәш, Үреш-Битулла, Үрештамаҡ, Нуриман районының Иҫке Бүрес, Саҡмағош районының Имәнлекүл, Суртанбаш (Иҫке Ҡото), Ҡарайерек, Ҡарғалы, Үрге Аташ, Яңы Ҡото ауылдарында, Благовещенда йәшәй.

Сараны район мәҙәниәт һарайының фойеһында ойошторолған бай күргәҙмә асты. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов, Борай районы хакимиәте башлығы Рушан Гәрәев, билдәле тарихсы Салауат Хәмиҙуллин һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтарҙы үҙебеҙҙең традицион йола буйынса бауырһаҡ, ҡымыҙ менән ҡаршылап, артабан урындағы араларҙың шәжәрәләре менән таныштырҙылар. Әммә тарих шәжәрәләр менән генә бөтмәне, Елдәк ырыуының тарихы сәхнәлә лә туры бер тамашаға әүерелде. Урта быуаттар дәүерендә елдәктәрҙең ҙур Дәште Ҡыпсаҡ ҡәбиләләр тупланмаһының бер өлөшө булыуы, 1206 йылда башланып, 14 йыл буйы дауам иткән башҡорт-монгол һуғышы, Башҡортостан менән Рус дәүләте бергә ҡушылғандан һуң ҡәбиләнең ерҙәре Елдәк улусын барлыҡҡа килтереүе, уларҙың аҫаба ерҙәрен нығытыусы грамота алыуҙары, башҡорт ихтилалдарында әүҙем ҡатнашыуы - барыһы ла күҙ алдында тергеҙелде.

Беҙҙең көндәргә яҡын булған тарихты ҡарағанда ла, 1917 йылдың 15 ноябрендә Ырымбурҙа "Башҡурдистан автономияһы" иғлан ителгәс, Борайҙа үткән Бөрө өйәҙе мосолмандары съезында өйәҙ башҡорттары һәм мишәрҙәре беренселәрҙән булып автономия идеяһын тулыһынса хуплауҙарын һәм уға ҡушылыуҙарын белдереп, Үҙәк Башҡорт Шураһы (Советы) исеменә телеграмма һуға. Шулай уҡ тарихта Борай ихтилалы ла феномен булып тора - 1918 йыл башында елдәктәрҙең иң ҙур ауылы Борайҙа Башҡорт милли шураһы ойошторола һәм Шәрәфетдин Хәмитов етәкселегендә ихтилал тоҡанып китә. Был шура 8 улус территорияһын Башҡортостан автономияһының Борай кантоны тип иғлан итә. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, Бөйөк Ватан һуғышы ҡырында ятып ҡалған шағир Мәлих Харис, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Хәләф Ғилданов, Ришат Шәрипов, Хәмитйән Зарипов, тел белгесе Ҡасим Әхмәров, билдәле генетик Эльза Хөснөтдинова һ.б. менән дә лайыҡлы ғорурлана ала елдәктәр.

Йыйындың пленар өлөшөндә ҡунаҡтарҙы Борай районы хакимиәте башлығы Рушан Гәрәев саф төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектында сәләмләп: "Республика күләмендә ойошторолған Ырыуҙар йыйыны тап беҙҙең районда башланыуына шатбыҙ. Борай ауылы - елдәк ырыуы башҡорттары йәшәгән төп ауылдарҙың береһе, районның гербында ла был ырыуҙың тамғаһы урын алған", - тине. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының тәбрикләү һүҙҙәрен Башҡарма комитет рәйесе Ғәлим Яҡупов еткерҙе: "Тарихҡа күҙ һалғанда, ырыу йыйындары - ул башҡорттарҙың боронҙан килгән дәүләт булараҡ ойошоу формаһы. Йыйындарҙа халыҡты борсоған проблемалар хәл ителеп, мөһим ҡарарҙар сығарылған. Ырыуҙар ҡоро халыҡтың берләшеүенә, быға тиклем республика кимәлендә билдәле булмаған ырыуҙарға үҙҙәрен танытырға этәргес булыр, тип ышанабыҙ. Башҡорт халҡының үҙ шәжәрәһенә булған ҡыҙыҡһыныуы милли үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлай, милли үҙаңды нығыта. Шәжәрәне өйрәнеп, тамырҙарыңды барлай башлаһаң, мауығып китәһең. Был күренеш бөгөнгө глобаллашеү ваҡытында айырыуса мөһим".

Салауат Хәмиҙуллин Борай төйәге, елдәк ырыуы тарихына ентекле туҡталды. Юлдаш Йосопов башҡорт ырыуҙары карталары, елдәк ырыуы халҡының йәшәгән биләмәләре тураһында бәйән итте. Искәндәр Сәйетбатталов башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты хаҡында һөйләне, сығышын тап ошо диалектта алып барҙы. Нурислам Ҡалмантаев елдәк ырыуынан сыҡҡан күренекле, әммә ҡайһы берҙәренең исемдәре онотолоп ҡалған шәхестәр менән таныштырҙы.

Фекер алышыуҙарҙа делегаттар әүҙем ҡатнашты. Елдәк ырыуы таралған төбәктәрҙән килгән һәр вәкил тыуған ауылы тарихы, шәжәрәнде, тамырҙарыңды белеү мөһимлеге хаҡында һөйләне. "Илеш районы Бишҡурай биләмәһенә ингән бөтә ауылдарҙа ла елдәк ырыуы башҡорттары йәшәй. Был ауылдарҙа үҙенең ерен, һыуын яратҡан, динен хөрмәт иткән, үҙенең шәжәрәһен өйрәнергә ынтылып торған халыҡ йәшәй. Бөгөнгө быуын үҙ тарихын һәм сығышын белергә тейеш. Шуға ла Борайҙағы йыйын Илеш башҡорттары өсөн дә әһәмиәтле", - тине Илеш районы вәкиле Рәмзилә Хәмиҙуллина.

Сарала шулай уҡ ырыу гербы раҫланды, белем биреү усаҡтарында балаларға башҡорт телен төньяҡ-көнбайыш диалекты нигеҙендә өйрәтеү, шәжәрә байрамдарын үткәреү, ырыу йәштәрен Башҡортостан кимәлендә үткән ҙур сараларға ылыҡтырыу, ырыуҙың үҙ сайтын булдырыу, елдәк ырыуының билдәле шәхестәренең исемдәрен мәңгеләштереү, ата-әсәләр араһында мәктәптә балаларҙың ниндәй тел өйрәнеүен һайлағанда башҡорт теле файҙаһына аңлатыу эштәре алып барыу буйынса фекерҙәр ҡарар менән нығытылды.

Ғәҙәттә, ырыу йыйындарында ҡор башы һайлайҙар, әммә был юлы Йәмәғәт советы һайланды. Осраҡлылыҡмы, әллә махсус рәүештәме, әммә унда тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына инде: Ҡариҙелдән Регина Хәйҙәршина, Благовещен районынан Фәниә Ситдиҡова, Дүртөйләнән Миләүшә Камалова, Нуриман районынан Дания Фәйрүзова һәм Саҡмағоштан Розалия Хафизова, Борай районынан Эльза Шәймиева (Ырыу советы рәйесе). Сара һуңында Ырыуҙар йыйыны штандарты балыҡсы ырыуына тапшырылды. Сираттағы йыйын Аҫҡын районында үтәсәк. "Был йыйын яңы быуында илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләр тигән өмөттәбеҙ", - тигән һүҙҙәр менән тамамланы сараны Юлдаш Йосопов.

Әйткәндәй, күптән түгел генә Башҡорт тарихы йылы унайынан әҙерләгән әңгәмәлә Юлдаш Йосопов: "Елдәктәр - үҙенсәлекле халыҡ, улар башҡа ырыуҙар кеүек тупланып та, бер ҡорға ылығып та бармайҙар", - тигәйне. Ырыу йыйынынан һуң, моғайын да, күптәр асылына ҡайтыр, тамырҙарын барлауға дәртләнер, тип ышанғы килә. Ни тиһәң дә, ҡан хәтере оҙон, тыйыуҙарға, быуыуҙарға ҡарамай ул ҡабаттан уяна.

Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠУРҒАН БАШҠОРТТАРЫНДА



**Хәбәр ителеүенсә, быйыл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Рәсәй төбәктәрендә, атап әйткәндә, Ҡурған, Ырымбур, Свердловск, Силәбе өлкәләрендә, Пермь крайында, Ханты-Манси автономиялы округында Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәрен үткәрергә планлаштыра. Проектты бойомға ашырыу Ҡурған өлкәһе вәкилдәре, ата-әсәләр йәмәғәтселеге менән онлайн-кәңәшмәнән башланып китте.**

Сара сиктәрендә онлайн-режимда түңәрәк ҡор ойошторолдо. Унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова, БР

**✓ Уран ҡәүеменең бер өлөшө, уларға шулай уҡ ҡәрҙәш булған йылан һәм ҡайлылар кеүек үк, Көньяҡ Уралда йәшәгән башҡорт ырыуҙары ерҙәренә килеп һыйына. Ваҡыттар үтеү менән улар аҫабалыҡ хоҡуғына эйә була.**



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# АТЫБЫҘ - УРАН, ЗАТЫБЫҘ БАШҠОРТ БЕҘҘЕҢ



Сығнаҡ хакимы Ҡадир Бүкү-хан 1195 йылда Уран хорезмшах Текеш солтанға ҡаршы баш күтәрә. Үҙ сиратында, Текеш уға ғазауат иғлан итә һәм походҡа сыға. Был турала Джувейни шулай яҙа: "591 (1195) йылдың ҡышы еткәс, ул Сығнаҡҡа һәм шул өлкәгә Кайир-Буку-ханға һөжүм итергә тип китте. Солтан һәм уның ғәскәре Джендҡа еткәс, Кайир-Буку-хан, ошоно белеп ҡалып, теҙгендәрен кирегә борҙо һәм ҡасты. Солтан уны ҡыуа китте. Унның армияһында бер ни тиклем уранлылар бар ине, уларҙы солтандың иран теллеләр өсөн хеҙмәтендә (аджамидлә сифатында) файҙалана инеләр. Улар Каийр-Букуға нык тороуын белдереп, армиялар ҡайтанан осрашҡан хәлдә солтанға хыянат итәсәктәре һәм артҡа бороласаҡтары хаҡында хәбәр ебәрҙе. Ошо хәбәр менән дәртләнеп китеүҙән ул кире боролдо, һәм ике армия 6-сы йомала алышҡа инде (1195 йылдың 7 февраленда).Солтан уранлылары армияның үҙәген ташлап китте һәм обозды таларға ташланды. Ислам армияһы тулыһынса ҡыйратылды".

Әммә Ҡадир хан да оҙаҡ тантана итә алмай. Өс йыл үтеүгә Ҡадир хандың энеһе Алп-Дерек, хан менән һүҙгә килеп, хорезмшах Текештан ярҙам һорай.

Солтан Алп-Деректа ғәскәр ебәрә, ул Ҡадир ханды енеүгә өлгәшә. Әммә уранлылар араһында буталыш көсәйеп китә, улар йыш ҡына Хорезмға һөжүм итеп тора. Асыуы ҡабарған Текеш солтан Ҡадир-Бүкү ханды ярлыҡап, азат итә, уны ҙур ғәскәре менән Алп-Деректа ҡаршы ебәрә. Ҡадир хан Сығнаҡта яңынан хакимлыҡ итә башлай.

Монгол яуы алдынан сик буйы ҡалаһы Отрарҙа Хорезм наместнигы Кайир-хан Инал идара итә, ул әсәһе буйынса хорезмшах Мөхәммәттең ике туған ҡустыһы булып, Уран хандары династияһына ҡарай. Урта быуат тарихсыһы Рәшид ад-Дин дә "Кайир-хан"дың солтандың әсәһе Туркан-хатун туғандарының береһе булыуы хаҡында телгә ала. Тимәк, Кайир Инал да сығышы менән уран ҡәбиләһе кешеһе була. Әммә ул ҡеүәтле монгол хакимы Сыңғыҙ хан алдында һис ғәфү итмәҫлек ғәмәл ҡыла: Кайир хан Отрарға килгән 450 монгол сауҙагәрен һәм илсеһен тотоп алып, язалатып үлтертә. Сыңғыҙ хан хорезмшахтан ошо енәйәтте ҡылыусыны үҙенә тотоп биреүҙе талап итә. Әммә уранлылар бунтынан ҡурҡҡан солтан быны эшләүҙән баш тарта. Был ошо тарафтарҙа йәшәгән мосолмандар өсөн ҡот осҡос фажиғә менән тамамлана.

1219 йылдың сентябрендә монголдар Отрар ҡалаһына килеп етә. Ҡалала йәшәүсе халыҡ 5 ай дауамында баҫҡынсыларға ҡаршылыҡ күрһәтә. Кайир хан үҙе лә, уның яугирҙары ла йән аямай алыша. Әммә улар хыянатсы арҡаһында һәләкәткә дусар була. Рәшид ад-Дин ошо ваҡиғаны бик ентекләп яҙып ҡалдырған: "Кайр-хан ике кешеһе менән тере ҡалды. Ул элеккесә ҡаршылыҡ күрһәтте һәм алышты. Монгол ғәскәре уны ҡалғәлә уратып алды. Ул ниндәйҙер өй башына күтәрелде һәм бирелергә теләмәне. Унның ике нөүкәре шулай уҡ үлтерелде, ә уның ҡоралы ла ҡалманы. Шул саҡта ул кирбестәр ташлай башланы һәм әүәлгесә алыша бирҙе. Монголдар уны әкренләп бар яҡтан урап алды һәм түбәнгә тартып төшөрҙе... Кайир-ханды Күк-Сарайҙа язаланылар һәм унан ары киттеләр. Һәм бөттө!"

Һуңғы хорезмшах Мөхәммәд Бохара һәм Сәмәрҡәнд дошмандан еңелеү менән үҙенең Ирандағы биләмәләренә ҡаса. Рәшид ад-Дин былай яҙа: "Унның әсәһенең уранлылар тип йөрөтөлгән туғандарынан бер төркөм төркиҙәр уның юлдаштары ине, улар уны үлтерергә теләне. Уларҙың береһе солтанға белдерҙе (ошо хаҡта). Ул төнөн тирмәнән сығып китте, йоҡлай торған урынын алыштырҙы. Иртә менән тирмәнең атылған уҡтарҙан селтәргә әйләнгән кейеҙен күрҙеләр".

Шулай итеп, ҡасандыр үтә ҡеүәтле булған солтанды, үҙенең булдыҡһыҙлығы арҡаһында монголдарҙан еңелгәс, барыһы ла ташлап китә. Монголдар тарафынан бөтөнләйгә ҡырылып бөтөрөлөүҙән ҡасып киткән уран ҡәүеменең бер өлөшө, уларға шулай уҡ ҡәрҙәш булған йылан һәм ҡайлылар кеүек үк, Көньяҡ Уралда йәшәгән башҡорт ырыуҙары ерҙәренә килеп һыйына. Ваҡыттар үтеү менән уларҙың байтағы тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында һәм төньяҡ тарафтарындағы ерҙәрендә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә була.

Әйткәндәй, башҡорт этносы тарихын яҡшы өйрәнгән күренекле ғалим Ә.-З. Вәлиди Туған үҙ нәҫеленең ҡайлы ырыуынан булыуы хаҡында яҙа: "Беҙҙең төп ырыуыбыҙ Суклы-Ҡай, ә беҙгә яҡын ырыуҙарҙан Санаҡлы-Кай, Йөрәктау-Ҡай, Таулы-Ҡай Ҡай йәиһә Ҡайлы ырыуы составына инә".

1552 йылда Иван Грозный ғәскәрҙәре Ҡаҙан ҡалаһын алғандан һуң, бәгзе бер башҡа башҡорт ырыуҙары юлбашсылары кеүек үк, уран ырыуының да күренекле вәкилдәре аҡ батша власын танырға мәжбүр була. Шул осорға ҡараған грамоталарҙың береһендә Аудыуаҡ Санбаев исемле уран ырыуы кешеһе биләгән ерҙәр хаҡында "был пожалован 64 четвертями земли (32 га тирәһе) "за Камою рекой", шулай уҡ "155 четвертями (77 га тирәһе) по обе стороны Буя (Буюн)", тип әйтелә.

1725 - 1726 йылдарҙа Көнгөр бургомистры Юхнев йыйған мәғлүмәттәргә ярашлы, Уран олоҫондағы 800 хужалыҡта хәрби хеҙмәткә ярарлыҡ 2 400 ир-ат була, әммә ошо ерҙәрҙә йәшәүсе башҡа халыҡ вәкилдәре лә телгә алына: "чюваши, месчеряки , черемисы и водане ". Был олоҫта сыуаштар бер ҡасан да йәшәмәй, күрәһең, Ҡаҙан тарафтарынан килгәндәр сыуаш тип аталған.

1730 йылда камерир Ю.Жилин, Өфө чиновниктары С. Третьяков һәм И. Гавренев тарафынан төҙөлгән "Реестр башкирских волостей" тип исемләнгән документта уран олоҫо ла телгә алына: "волость Уранская по Бую, леса превеликия и поля есть". Был документта урандарҙың Кама буйындағы ерҙәре иҫәпкә алынмаған.

Уран олоҫо башҡорттары XVII - XVIII быуаттарҙа бер-бер артлы тоҡанып торған башҡорт ихтилалдарының барыһында ла ҡатнаша. 1704 - 1711 йылдарҙағы оҙайлы ихтилалда ҡатнашҡан абруйлы башҡорт етәкселәре (Уран олоҫонан Күгәй Кинйәбаев, Мортазипов, Байтимеров) Ҡаҙан губернаторы П.М. Апраксинға тәғәйенләнгән мөрәжәғәттәрендә батша һалымсыларының 72 яңы һалым статьяһы индереүен, мәйеттәрҙе мәсет эргәһендә ерләүҙе талап итеүҙе һәм халыҡҡа башҡа ошондай ризаһыҙлыҡ тыуҙырыусы сәбәптәрҙе күрһәтә. Әбына 1735 - 1740 йылдарҙағы ҡанға батырылған ихтилал етәкселәренең береһе Уран олоҫо башҡорто Хәлил Әбдесәлимов була. Башҡорт эштәре комиссияһы экстрактында ошо хаҡта ла мәғлүмәт бар: "на реке Багазе 250, у них главный Уранской волости деревни Кустяй Халил Абдусалимов, да брат ево Искандер Мустафа Тумянеев, все оружейные".

1773 йылда Уран олоҫо старшиналары Мәкәй Йосопов, Мәхди Мәдияров һәм Абдук Чептәржәпов (йәиһә Чапдарбаев) етәкселегендәге баш күтәреүселәр отряды Камбар заводын баҫып ала. Уран башҡорттары шулай уҡ Сарапул ҡалаһын алыуҙа һәм Минзәләне ҡамауҙа ҡатнаша. Уса ҡәлғәһенә һөжүм барышында Салауат Юлаев ғәскәренә урандарҙың Ҡом ауылы башҡорто, полковник Айыт Сәйетов яугирҙары ла ҡушыла. Әсир алынған Мәхди Мәдияров үлем язаһына хөкөм ителә, әммә, ҡолаҡтары киҫтерелеп, ҡамсы менән һуҡтырылып, азат ителә. Айыт Сәйетов Ҡаҙан зинданында үлә.

Генетик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә уран ырыуы башҡорттарының N1c гаплотөркөмөнә ҡарауы билдәле булды. Гаплотиптары буйынса уларға иң яҡындары - йылан һәм ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары һәм тыва халҡы кешеләре.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

---

мәғариф министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, Ҡурған өлкәһе яғынан Мәғариф департаменты, Мәғлүмәт һәм сәйәсәт департаменты вәкилдәре, өлкә башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Ильяс Бәҙретдинов һәм башҡалар ҡатнашты. Дистанцияла ойошторолһа ла, түңәрәк ҡорҙа ике яҡ та үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алды, ҡайһы бер мәсьәләләр урында хәл ителде, асыҡланды, ә ҡайһы берҙәре контролгә алынды.

Билдәле булыуынса, Ҡурған өлкәһендә 12 мендән ашыу башҡорт иҫәпләнә. Уларҙың күбеһе Әлмән һәм Сафакүл райондарында йәшәй. Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы, уның район бүлексәләре, "Ҡурай" йәмғәт ойошмаһы уларҙы туған телгә, мәҙәниәткә ылыҡтырыу юҫығында эштәр атҡара. Мәҫәлән, ҡоролтай етәксеһе Ильяс Бәҙретдинов башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән бренд-сараларҙан "Йырсы торналар" һәм халыҡ байрамы "Һабантуй"ҙы атап китте. Пандемияға ҡарамаҫтан, өлкә башҡорттары ҡоролтайы былтыр "Һылыуҡай-2020" һәм "Йәшлек-шоу" бөтә Рәсәй конкурстарын үткәреү әмәлен дә тапҡан һәм тормошҡа ашырған. Фекер алышыу барышында өлкәлә башҡорт телен уҡытыу йәһәтенән проблемалар барлығы асыҡланды. Мәҫәлән, Сафакүл, Ялан һәм тағы бер нисә ауылға башҡорт теле уҡытыусылары кәрәк. Үҙ туған телен өйрәнергә теләгән балаларҙың бихисап булыуын иҫәпкә алып, Шадринск һәм Ҡурған ҡалаларында башҡорт йәкшәмбе мәктәптәре, балалар баҡсаһында төркөмдәр асыу ҙа бөгөн көнүҙәк мәсьәлә. Шулай уҡ туған телдә уҡыуға хоҡуҡты бойомға ашырыу буйынса уҡытыу-методик консультациялар, музыка ҡоралдарында уйнарға, бейергә өйрәтеү, мәҙәни-ағартыу сараларҙы үткәреү кеүек ихтыяж тураһында ла мәсьәлә күтәрҙе Ҡурған башҡорттары. Шуға ла берҙәм саралар планына өлкәгә мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәрен саҡырып, оҫталыҡ дәрестәре уҙғарыу, башҡорт халыҡ милли кейемдәре, белем биреү ойошмаларын дәреслек, күргәҙмә материалдар, матди-техник база менән тәьмин итеү, Башҡорт милли хәрәкәтенең арҙаҡлы шәхестәре Шәриф Манатов, Ғәлимйән Тагандың мемориаль таҡталарын яңыртыу һәм башҡа саралар теркәлде. Түңәрәк ҡор ултырышын йомғаҡлап, Эльвира Айытколова, Ҡурған өлкәһендә йәшәгән һәр милләттәшебеҙ беҙҙең ярҙамды тойоп йәшәргә тейеш, тине. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа берҙәм булырға саҡырҙы.

**Лена БАРЫЕВА әҙерләне.**

(Аҙағы. Башы 3-сө һанда).

***✓ "Һеҙҙең шиғырҙарҙы күңелдең һәр төрлө ваҡытында алып уҡырға була. Һеҙ - күңел шағирәһе", тип яҙғандары бар. Уҡыусыма шулай кәрәк саҡта шифалы һүҙ әйтә алам икән, был минең өсөн иң юғары баһа.***

# ШИҒЫРҘАР ЯҘЫЛА...

## һағыштан, йөрәк әрнеүенән, тетрәнеүҙән

**Интернет заманында был уңайлыҡҡа ҡулайлашырға ашыҡмаған әҙиптәребеҙ күҙ уңынан ысҡынып, игтибарҙан төшөп ҡалды кеүек. Шундайҙарҙың береһе булған шағирә Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНАның бер нисә шиғырын интернетҡа ҡуйғайным, уҡыусылар "гөж" итеп ҡалды. Әллә күпме матур һүҙҙәр, теләктәр, иҫтәлектәр яуҙы. Халыҡ һағынған икән апайҙы. Һәм уҡыусыларҙың һорауы буйынса Зөһрә Ҡотлогилдинаның үҙе менән әңгәмә тәҡдим итергә булдыҡ.**

**Зөһрә апай, һеҙ ниндәй ғаиләлә үҫтегеҙ? Атай-әсәйегеҙ ниндәйерәк кешеләр ине? Ғаиләнең йәшәү принциптары, яҙмышы ҡалайыраҡ булды?**

- Бер нәмә лә буштан ғына барлыҡҡа килмәй. Кешенең холоҡ-фиғеле ғүмер биргән атайәсәйенә, олатай-өләсәйенә барып тоташа. Әниебеҙ (беҙҙең Көйөргәҙе районында шулай тиҙәр) Минһылыу Шәрифйән ҡыҙы Урта Мотал ауылында тыуып, Ялсыҡайға килен булып төшкән. Атаһы, Шәрифйән олатай, үтә шаян кеше булып, урамдан үткән бер кешегә таҡмаҡ сығарып ҡалыр булған. Минә уны күрергә тура килмәне, сөнки бик иртә баҡыйлыҡҡа күскән. Әниебеҙ бик моңло итеп йырлай торғайны. Ул халыҡ йырҙарын башҡарғанда хатта олпат ирҙәр илап ултырыр ине. Әтайыбыҙ, һуғыштан яраланып ҡайтҡан ир-уҙаманы Сәлимйән Ноғман улы тальянда бик оҫта һыҙҙырған. Госпиталдәрҙә ятҡанда өс ҡалын дәфтәр итеп шиғырҙар яҙған. Шунда уҡ иллюстрация итеп һүрәттәрен дә төшөрә барған.

Үкенескә ҡаршы, мин атаймыды хәтерләмәйем. Ул вафат булғанда миңә бары йәш ярым нан тыш мин гитара, мандолина, скрипкала ла өйрәндем әле. Унынсыла уҡығанда "Башҡортостан пионеры"нда хикәйәм сығып, 10 һум гонорар килеп төштө. Иҫ китте! Шуға скрипка һатып алдым. Тик Нәгимә өләсәйҙең өйө янғанда был скрипкам да әрәм булды.

Йырға ла әүәслек күскән миңә ҡомартҡы булып. Бөтөн ошо һәләттәремде үстереү өсөн Стәрлетамаҡтың мәҙәниәт йүнәлешендәге уҡыу йортона юлландым да... ишеген дә тартып ҡарамайынса, кире боролоп ҡайттым. Музыканы, сәхнә тормошон үтә юғары бейеклек күреп, беҙҙең кеүек ауыл балалары өсөн буй еткеһеҙ үр, тип уйлап, һүрелдем. Ә йырлағанымды ишеткәндән һуң билдәле йыр сәнғәте әһелдәре күп тапҡырҙар шул йүнәлешкә саҡырҙы... Хәҙер башҡаларҙың йырлауын йотлоғоп тыңларға ғына ҡалды. Сәләмәтлекте юғалтып, дарыуҙарға ултырыу тауышты бөтөрҙө.

**Ижадҡа мөнәсәбәт ҡайһы ваҡытта барлыҡҡа килде? Кемдәр һәм нимәләр сәбәпсе булды быға?**

- Бишенсе класта уҡығанда әниебеҙ беҙгә атайыбыҙҙың шиғыр дәфтәрен күрһәтте. Ул ла-хананың бер бүлмәһендә йәшәп ижад иткән. Шул килгәнендә бер осрашыу үткәргән. Мин ауылдан барып етә алманым. Ул минең шиғырҙарҙы ҡарап сығып, хат яҙып ебәрҙе. Хатта: "Үҙең тураһында мәғлүмәт менән шиғырҙарыңды көтәм, "Совет Башҡортостаны" гәзитенә тәҡдим итергә теләйем", - тигән. Аптырап киттем. Ышанманым. Шулай ҙа бер шәлкем һалдым. Шәриф ағайҙың баш һүҙе, фотом менән 8 март һанында баҫылып сыҡты. Бар ауыл халҡы бот сапты, минең өсөн шатланды. Ә минең ҡыуанысымды белһәгеҙ!

Юҡ, ул саҡта ла, әле лә мин үҙемде шағирә итеп тоймайым. Мостай ағайҙың: "Шағир - ул бик ҙур һүҙ, мин үҙемде шиғырсы тип кенә иҫәпләйем", - тигән һүҙҙәре бар шикелле, әгәр яңылышмаһам. Мин дә шулайыраҡ тип уйлайым.

**Ғаиләгеҙ һеҙҙең ижадсы булыуығыҙҙы танынымы? Ирегеҙ Нияз Мәһәҙиев ағай һеҙҙе илһамландырҙымы, әллә шул мөнәсәбәттәр һеҙҙән һағышлы шағирә яһанымы?**

- О-о-о, Нияз хаҡында һөйләй башлаһаң, үҙе бер китап яҙырлыҡ. Ул шундай һиҙгер, яҙып ҡуйған. Нияздың яуабы ла бар, ебәрмәгән, күрәһең: "Яҙыусыларҙың миңә нимә биргәнен һин ҡапыл ғына аңламаҫһың, ағай", - тигән. Нияз үҙе шиғриәткә шул тиклем талапсан булды. "Рәйес Түләк менән Рәмил Ҡолдәүләттән һуң шиғыр яҙып торорға кәрәкмәй", - тип ебәрә ине. Күп шағирҙарҙың шиғырҙарын яттан белде үҙе. Бигерәк тә Рафаэль Сафиндың ижадын яратты.

Былтыр Нияз Мәһәҙиевтың яҙмаларын йыйып-туплап, китабын баҫыуға тапшырҙым. Ярҙам итеүселәр табылды, рәхмәт төшкөрө. Бына ошоларҙы уҡығас, һеҙ үҙегеҙ аңларығыҙ ғаиләмдә минең ижадымды, ғүмүмән, ижад кешеләрен нисек баһалағандарын.

**Интернет заманында күп кенә оло быуын яҙыусылары**



- Журналистикаға килгәндә... Үткер мәсьәләләр күтәрелмәй, нимә яҙырға-яҙмаҫҡа икәнде өҫтән әйтеп торалар, күрәһең. Бер ваҡыт, хәтерләһәгеҙ, Торатау тураһында яҙырға ла тыйыуҙар булғайны бит. Һеҙҙең "Киске Өфө"лә журналист Фәүзиә Иҙелбаева "Гәзит кемдеке һуң?" тигән мәҡәләһендә былай тигәйне: "Эйе, беҙҙең ойоштороусыларыбыҙ бар, уларһыҙ гәзит тә йәшәмәйәсәк, сөнки, нисек кенә һауаға талпынма, матди сыныйр ергә тарта, хаттин ашыуға юл ҡуймай. Шулай итеп, ойоштороусы күрһәтмәһенә буйһонорға ла тура килә, сөнки ҡыйыу күренәйек тип, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа балта саба алмайбыҙ..." Дәүләт ҡарамағында булмаған баҫмалар ғына ҡыйыу темалар күтәрә алалыр. Мәҫәлән, Нияз "Халыҡ һүҙе" гәзитендә мөхәррир булғанда бынан ун йыл элек Торатау, БСК, Кипр офшорҙары һәм башҡалар хаҡында асыҡтан-асыҡ яҙып сыҡты. Башҡа бер матбуғат баҫмаһы ла ул хаҡта телгә алырға батырсылыҡ итмәне. Хәҙер килеп, ил етәксеһе Путин ғына ул мәсьәләгә ҡыҫылып, үҙ мөнәсәбәтен әйткәс, бөтәһе лә яҙа башланы. Ә бит теге саҡта ла кешеләр дөрөҫлөккә ҡыуанғайны, ҡасан "Халыҡ һүҙе"нең яңы һаны сыға тип көтөп йөрөнөләр. Дөрөҫлөктө ҡыйыу яҙа алғанға тукмаҡ та эләгә шул. Шул гәзиттә эшләгәндән һуң Ниязға дәүләт баҫмаларына юл ябылды. Улыбыҙ Азамат студент, ипотека түләйбеҙ. Ул йылдары беҙҙең кисергәндәрҙе бер Аллаһы Тәғәлә генә белә... Миңә, әллә нисә тапҡыр тәҡдим ителеп тә, Шәһит Хоҙайбирҙин премияһы бирелмәүенең сәбәбе лә шундалыр тип уйлайым.

ғына булған. Атайыбыҙ ауырып, хәлһеҙ генә ултырғанда ла беҙҙең, балаларының, күңелен күтәрергә тырышып, ҡулына гармун алған. Ә беҙ түңәрәккә бейергә төшөп китәбеҙ икән...

Атайымдың атаһы - олатайыбыҙ Ноғман Лоҡман улы Беренсе донъя һуғышында, граждандар һуғышында ҡатнашҡан, Петроградты һаҡлаған. Аяғына пуля тейеп, аҡһаҡлап ҡалған, таяҡ менән йөрөнө. Ул да матур йырланы. "Тәфтиләү"е әле лә ҡолаҡта сыңлай һымаҡ...

Өләсәйебеҙ Мәрхәбә Низам ҡыҙы таҡмаҡсы ине. Ҡунаҡйыйындарҙа ситеген шипылдатып, таҡмаҡтарын яуҙырып бейергә төшөп китә ине. Һәм бына ошондай ғаиләлә тыуыпүҫеп, йырлы-моңло булмай ҡара!

Атайыма оҡшап, гармун уйнарға ҡыҙыҡтым бала саҡтан. Тик әсәйемдең, егерме биш йәштә балалар менән тол ҡалған ҡатындың, гармун һатып алырлыҡ хәле булмағандыр инде. Ә шулай ҙа һатып алдым мин ул гармунды. Үҙем эшләп алдым. Урта мәктәпте тамамлағас, райондағы Бабич ауылына башланғыс мәктәп уҡытыусыһы итеп ебәрҙеләр. Шунда эшләгән аҡсама гармун һатып алдым. Бытин хәрефтәре менән яҙғайны. Әнием беҙгә шуларҙы уҡырға өйрәтте, атайығыҙҙың ниҙәр яҙғанын белегеҙ, тине. Беҙ апайым менән башта тексты һәр юл аҫтына үҙебеҙҙең хәрефтәр менән ҡабаттан яҙып сыҡтыҡ, унан ныҡлап уҡырға өйрәндек. Шул шиғырҙарҙы ҡат-ҡат телдән үткәргәндә, уларҙың атайыбыҙ күңеленән сыҡҡанлығын белгәнгәме, бик тетрәндек. Һәм был хәл осҡон ҡабыҙмай ҡалмағандыр, тип уйлайым. Шул уҡ йылды "Башҡортостан пионеры"нда тәүге мәҡәләм донъя күрһә, алтынсыла уҡығанда "Яҙ" тигән тәүге шиғырымды яҙҙым. Уҡытыусыбыҙ уны районның "Ильич юлы" гәзитенә ебәргән һәм унда ла баҫылып сыҡты. Шулай итеп, матбуғат һәм шиғриәт менән дуҫлашыуыма 55 йыл булып китә!

**Башҡорт әҙәбиәтенә аяҡ баҫҡан сағығыҙ нисек булды? Кемдәр менән аралаштығыҙ, кемдәр остаз булды? Һеҙ үҙегеҙҙе шағирә итеп тойҙоғоҙмо?**

- Бабич мәктәбендә эшләгән йылда районыбыҙға шағир Шәриф Биҡҡол ағай килгәйне. Уның күп әҫәрҙәре Күмертауҙа, беҙҙең яҡтарҙа яҙылған. Ҡунаҡкүп нәмәне алдан тойомлай алған, һине үтә күрә торған бер кеше булды. Нияз һәр ваҡыт мине күтәрҙе. Ҡайҙа барһаҡ та, кем менән осрашһаҡ та, башта минең менән таныштыра: "Шағирә Зөһрә Ҡотлогилдина", - ти. Минең яҙғандарҙы тикшереп, мөхәррирләп ҡуя ине. Ул яҡҡа ла оҫта булды бит ул. "Һеҙҙең филфакта уҡыуығыҙ, шуны ла белмәйһегеҙ", - тип ҡуя торғайны ҡай саҡ. Ә бит ул үҙе лә иҫ киткес талантлы ине, тик үҙенә лә, ижадына ла иғтибарһыҙ булды.

Нияз Өфө нефть техник университетының архитектура бүлеген тамамлай. Бәләкәйҙән китапханасы булған әсәһе эргәһендә ултырып, биш йәше тулыр-тулмаҫтан уҡырға өйрәнә. Ололар уның уҡый белеүенә ышанмай, кәнфит биреп уҡытып ҡарап, хайран ҡалалар икән. Студент сағында Өфөнөң икенсе башына БДУ-ның "Шоңҡар" түңәрәге үткәргән кисәләргә, яҙыусылар менән осрашыуҙарға йөрөй. Әле яңыраҡ уға килгән хаттарҙы уҡып ултырҙым. Шунда бер хатта Ғаяз ағаһы: "Шиғыр тип йөрөп, уҡыуыңа зыян килмәһен. Ул яҙыусылар һинә нимә бирә..." - тип

**юғалып ҡалды. Һеҙҙе лә экранда күреү, ижадығыҙҙы уҡыу мөмкинлеге юҡ тиерлек. Уҡыусыларығыҙ һеҙҙе һағынған, интернетта күренәсәкһегеҙме?**

- Нияз күпме әйтте интернетта аралашырға өйрән тип. Ул интернетты эш ҡоралы итеп тотондо, яңылыҡтарҙы, ил-донъя хәлдәрен ҡарап сығып һөйләне. Тик минең һаман да быға форсат юҡ, ваҡыт булғанда ҡул менән яҙайым, ти ҙә ултырам. Бөгөн, әлбиттә, интернетһыҙ мәмерйә кешеһе һымаҡбыҙҙыр инде. Хатта интернет аша сәләм ебәргән, ҡотлау яҙғандарҙы ла уҡый алмай ултырыла. Икенсе яҡтан, аралашыр, күрешер кешеләр менән былай ҙа осрашып-һөйләшеп торам, донъянан артта ҡалған юҡ, һулышын беләм. Телевизор ҡарамаһам да, радио тыңламаһам да хәбәрҙең яҡшыһы ла, яманы ла килеп етеп тора. Уның ҡарауы, ваҡытлы матбуғаттан айырылғаным юҡ. Гәзит-журналдарҙы алдырып, рәхәтләнеп уҡып кинәнәм. Бына шундай үҙ заманымда ҡалған кешемен инде мин.

**Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте, журналистикаһы хаҡында ни әйтерһегеҙ?**

**Шиғырҙарығыҙ аша һеҙҙе хисле, йомшаҡ, хатта аҙыраҡ баҙнатһыҙыраҡ апай итеп күрәм. Ә асылда һеҙ ниндәй кеше, ниндәй тойғолар менән ижад итеүсе?**

- Баҙнатһыҙлыҡ етем үҫеүҙән киләлер. Дөрөҫ аңғарғанһың. Атайһыҙлыҡ балала ҙур комплекслыҡ тыуҙыра һәм был тормошта ла сағылыш таба. Көмселек тойғоһо һөйҡәтәрҙә тиклем һеңгән һәм унан ҡотолоу күптәр өсөн мөмкин булмаған хәл. Бер ғәйрәтле атаның иркә балаһы булып үҫергә яҙманы, ҡалайтаһың...

"Һеҙҙең шиғырҙарҙы күңелдең һәр төрлө ваҡытында алып уҡырға була. Һеҙ - күңел шағирәһе", тип яҙғандары бар. Уҡыусыма шулай кәрәк саҡта шифалы һүҙ әйтә алам икән, был минең өсөн иң юғары баһа. Шиғыр һәм шиғриәт шуның өсөн хеҙмәт итергә тейеш тә.

Ә холоҡҡа килгәндә, кәрәк саҡта сатнатып әйтә лә беләм. Баҙнатһыҙлыҡ күрһәтеп, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрмәйем.

✓ *Улың ҡәҙерле булһын, тиһәң, килененде ҡыҙың итеп ярат, ҡыҙың ҡәҙерле булһын тиһәң, кейәүеңде улыңдай күр. Был да үҙенә күрә яңы төҙөлгән ғаиләнең ныҡлығы өсөн ҡәйнә-ҡайнылар яуаплы икәнен белдерә.*



Намыҫым ҡушҡанса дөрөҫлөктө яҡлап ауыҙ асам гәҙиттә. Дөйөм алғанда иһә, мин бит утыҙ йыл ир ышығында яҡлаулы ла, һаҡлаулы ла булып йәшәнем, шуға артыҡ холоҡ күрһәтеп йөрөү кәрәк тә булманы. Шиғырҙарымда был да сағылалыр.

**Шағирҙың шағир булыу асылы нимәлә? Матурлыҡҡа дан йырлауҙамы, әллә халкына хеҙмәт итеүҙәме?**

- Халҡым тип ҡыҫҡырмайса,
Халҡың өсөн эшлә көн дә.
Маҡтау көтмә, баһа көтмә,
Үҙең генә, әйҙә, бел дә
Изгелек ҡыл халҡың өсөн, - тип яҙған бер шиғырым бар. Мин трибун шағир түгел. Шулай ҙа матурлыҡҡа дан йырлап ҡына йәшәү аҙ. Матурлыҡ йәшәһен, матурлыҡты күрһен өсөн халҡыңдың имен-һау, илле, ерле, телле булыуы шарт. Ҡулына ҡәләм алған һәр ижад кешеһен бөгөн шул борсорға тейеш.

**"Бәхетлеләр шиғыр яҙмай" тигән цитата нигеҙләме ул?**

- Тағы ла үҙемдең шиғыр юлдарын килтерәм:
Бәхетлеләр шиғыр яҙмай,
Улар - үҙҙәре шиғыр.
Яҙмыштары балҡып тора,
Ғүмерҙәре - тотош йыр.
Шиғырҙар һағыштан, йөрәк әрнеүенән, тетрәнеүҙән яҙылалыр ул. Әнием киткәндән һуң уны юғалтыу ҡайғыһынан бик күп шиғырҙар яҙҙым. Тимер Йосопов был хаҡта: "Башҡорт әҙәбиәтендә әсәйҙәр хаҡында былай яҙған кеше юҡ ине әле", - тигәйне.

**Шиғриәтте ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ шиғриәтенә айыраһығыҙмы?**

- Шиғриәттең енесе юҡ. Шиғыр йә бар, йә юҡ. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар яҙа алмаған бишек йырҙарын Рәми Ғарипов ижад иткән. Рауил Бикбаевтың да "Бер ҡулыҡыҙ бишек бәүеткәндә, икенсеһе Ерҙе бәүетә!" - тигән юлдары бар. Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан "Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоғон" тип оран һалыусы Фәкиһә Тығыҙбаева менән "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ" тигән шиғырҙы яҙыусы Зөлфиә Ханнанованың шиғырҙарын ҡатын-ҡыҙ шиғриәте тип кенә нарыҡлау урынлымы?

**Бөгөн ниндәй пландар менән йәшәйһегеҙ?**

- Пландар күп. Ошо сир-сырхауҙар тиҙерәк үтеп китһен инде. Халҡыбыҙ имен-һау булһын. Тормош дауам итһен. Өйҙә ултырыу ныҡ ялҡытты. Беҙ кешеләр менән аралашып, күрешеп йәшәргә өйрәнгәнбеҙ, шунан яҙыу ауыр.

Әле "Байҙар ҙа ҡыҙыҡыр байлыҡ" тип аталған ҡулъяҙмамды әҙерләнем. Рус теленә тәржемә ителгән шиғырҙарымды ла баҫып сығарырға кәрәк. Уҡыусылар менән осрашҡанда йыш ҡына русса китап һорайҙар.

Эш күп. Нияздың ҡағыҙҙары менән дә булышам. Үҙемдең архивта ла соҡсонам. Ғүмер булһа, киләһе йыл юбилейым. Уны лайыҡлы ҡаршыларға ине...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ*

# КИЛЕНДӘРҘЕҢ ШӘБЕ...

## ҡәйнәләр менән бергә йәшәгәне



*Баймаҡта "Килен һәм ҡәйнә" тигән саралар йыш үтә.*

**"Киске Өфө " гәзитен инде ун биш йыллап алдырам һәм һәр мәҡәләне диҡҡәт менән уҡырға тырышам. Улар миңә үҙенең тәрән мәғәнәле һәм уйландыра алыу үҙенсәлектәре менән оҡшай. Шундай мәҡәләләрҙең ҡайһы берҙәрен дауам итеп, үҙем дә бер кәлимә фекеремде яҙып ҡуям. Әле бына быйылғы тәүге һанды ҡулға алғас, Хәлил Һөйөндөковтың "Ни сәсһәң - шуны урырһың" тигән мәҡәләһе минең күңелемдә күптән инде бешеп еткән фекеремде яҙырға мәжбүр итте.**

Был темаға мин "Атайсал", "Башҡортостан" гәзиттәренең сайттарында мәҡәләләр ҙә баҫтырғайным инде, тик мин унда айырым ҡәйнә-килендәр тураһында һүҙ алып барғайным. Автор, минең уйлауымса, бик урынлы проблеманы асырға тырышҡан. Проблема тип атауым да ана шул ҡәйнә менән килендәрҙең бигүк һыйышып йәшәргә теләмәгән күренештәре өҫкә йышыраҡ күтәрелә барыуынандыр, тип уйлайым. Ҡалала ҡәйнә менән килендәрҙең бергә йәшәгән осраҡтары һирәктер ҙә, бәлки, тик бына ауылда ундай ғаиләләр күп. Һәм нисек йәшәйҙәр һуң?

Ауылыбыҙ менән "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға ҡарар иткәс, эште һәр ғаиләнән башларға булдыҡ. Миненсә, дөрөҫ эшләгәнбеҙ. Һәр төр ҡылыҡ ғаиләлә һалына бит. Бына шулай, һәр өйгә инеп, ғаилә хәлдәре менән танышып сыҡҡандан һуң, мине күптән борсоған һорауға ла яуап табылған кеүек булды. Ауылда 20, 25, 30, 35 йыл ҡәйнә менән йәшәгән килендәр бар. Башҡортта бер мәҡәл бар: "Ике кәзә башы бер ҡаҙанға һыймай", ләкин бына ҡәйнә менән йәшәгән шундай килендәрҙе күрһәң, был мәҡәлдең хатта урынһыҙ икәненә ышанаһың. Тик ундай ғаиләләр хәҙер бик аҙ. Оҙатылып килгән килен иң алда айырым йәшәү, йәки айырым өй һалып биреү кеүек дәғүәләр белдергән осраҡтар күп. Ике ғаилә, ике төрлө тәрбиә, ике төрлө йолаларға таянып йәшәгән кешеләр бер булып берегеп китә лә алмайҙар. Был ғаиләнең ниндәй тәрбиә биреүенә лә бәйле. Әгәр олоно - ололоҡлап, кесене кеселекләй белһәң, берең ут булғанда, икенсең һыу булырға күнекмәһәң, низағ килеп сыҡҡанда берәү ҙә бисмилланы әйтмәй. Был урында был изге һүҙ ҙә һәм башҡа аҡыл да баштан сығып ҡаса.

Килен менән ҡәйнә беренсе әйтешкәнгә тиклем сыҙай, ти торғайны беҙҙең ауылда Сәкинә тигән инәй. Унан һуң, улар өсөн бит йыртыла. Тимәк, ошо беренсе низағты нисек тә сығармаҫлыҡ итеп йәшәр өсөн әсәй кеше ҡыҙына тәрбиә бирергә тейештер ҙә. Ауылда оҙаҡ йылдар ике ҡәйнә менән йәшәгән Тәнзилә Хажи ҡыҙы булды. Һөнәре - уҡытыусы, ә уҡытыусысының тауыҡ сүпләһә лә эше бөтөрлөк, мәктәптән ҡайтып инерлек түгел. Кемдәр һәйбәт, тигән уй тыуыр. Әлеге ике ҡәйнә аҡыллы булғас, килен дыуамал була алмай инде. Шулай булғас, аҡыл башта олола булһын, тип әйткем килә. Әлеге ваҡытта ауылыбыҙҙа 35 йыл килен менән торған 80-дә уҙған Рәйсә Вәли ҡыҙы йәшәй. Ваҡытында килене лә, үҙе лә фермала эшләнеләр. Ләкин балаларын башҡаларға өлгө булғандай итеп тәрбиәләй алдылар. Килене Нурия "Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы" исемен дә алыуға өлгәште. Ҡәйнәнең шулай киленен үҙ балаһындай ҡабул итә белеүе ҙур әһәмиәтҡә эйә. Ҡәйнәһенең дәртләндереп тороуын, килененең хаҡлы ялда булһа ла, һаман да эшкә ынтылыуын күреп һоҡланабыҙ. Улар ғаиләһе менән дин юлына ла баҫҡандар, һоҡланмаҫлыҡ та түгел шул. Туғыҙынсы тиҫтәне тураҡлай башлаған Рабиға Әхмәҙиә ҡыҙы ла 4 киленгә ҡәйнә булды, уҡытыусы килене менән дә ун йыллап бергә, егерме йыллап күрше йәшәйҙәр, уртала ҡапҡа. Улар бер-береһенә серҙәш әхирәт кеүектәр, ҡәйнә менән килен тип тә уйламаҫһың.

Ауылыбыҙҙағы тағы бер-ике ғаиләне әйтмәй үтә алмайым. Ринат Һибәтуллин ҡатыны Гөлниә һәм 4 улы менән йәшәй, ләкин бына атлай алмаған аталарын тәрбиәләйҙәр. Кәримов Ишморат ҡатыны Вәсилә менән шулай ук 30 йыл инде атаһын ҡарайҙар. Ике ғаиләнең дә аталары йәш саҡта класташ, дуҫтар булдылар. Булат Кәримовтың ҡатыны үлгәнгә утыҙ йыл, Нурмөхәмәт Һибәтуллиндың ҡатыны үлгәнгә ике йыл. Икеһенә лә быйыл 80 йәш тулды. Улар үҙҙәре шулай яҡшы булғанға күрә, балалары ла ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп тора. Киң күңелле килендәр ҡайныларына ҡартлыҡ бәхете татытып йәшәтә.

Ауыл ерендә бындай миҫалдарҙы күп килтерергә була, тик уның киреһе лә байтаҡ. Ҡәйнәнең һәр һүҙен олоға олғаштырып ҡына ҡалмай, уны үҙ әсәһе менән сағыштырып, биҙмәнгә һалып үлсәгәндәй ҡылыҡһырлаусы килен менән ҡәйнә араһында, әлбиттә, ғауға, әр һүҙе сыға. Киреһенсә, ҡәйнәнең киленен үҙ ҡыҙыңдай ҡабул итергә тырышмауы, уның етешһеҙ яҡтарын күрергә генә тороуы ла шул һөҙөмтәнә бирә.

Туйҙарҙа бик һирәк ошондай теләктәр әйтәләр: улың ҡәҙерле булһын, тиһәң, килененде ҡыҙың итеп ярат, ҡыҙың ҡәҙерле булһын тиһәң, кейәүеңде улыңдай күр. Был да үҙенә күрә яңы төҙөлгән ғаиләнең ныҡлығы өсөн ҡәйнә-ҡайнылар яуаплы икәнен белдерә. Бер генә йәш килен, кейәү, үҙе өсөн асыҡ сырай, ҡунаҡсыллыҡ менән сумартлыҡ күрһәткән ҡайны-ҡәйнә менән әр һүҙенә килмәй.

Өй эсендәге низағтар үҫеп килеүсе баланың күңеленә орлоҡ булып төшмәй ҡалмай. Бала күңеле - көҙгө, бөтәһен дә күңеленә һала бара. Әсәһенең олатаһыөләсәһенә булған мөнәсәбәте ошо бала тарафынан уларға ҡартлыҡ көнөндә әйләнеп килә. Һөҙөмтәлә күпселек осраҡта кәрәкмәгән әсәйҙәр, ҡәйнәләр барлыҡҡа килә. Уларға ҡараусылар яллайҙар, йә булмаһа, ҡарттар йортона тапшыралар. Бер генә һүҙ яуап ителә улар тарафынан: "Мин йәш саҡта күрмәгәнде күрһәтте инде". Бәлки, шулайҙыр ҙа, ләкин кеше күңеле ғәфү итә белеүе менән бәҫле. Һөйгәнемдең арҡаһында һөймәҫемде һөйәмен, тиҙәр мәҡәлдә лә. Улын яратҡанһың икән, ҡартлығы өсөн булһа ла, йәлләп, бәлки, ихтирам итеү көсө табып, ғәфү итә белеү ҙә арыу булыр ине. Бында инде мин атта ла, тәртәлә лә бар тимәксемен. Тәртә төҙ булһа, дөрөҫ нығытылһа, ат тибәләнмәгәне көн кеүек асыҡ.

Мин үҙем дә 25 йыл ҡәйнә. Шуның 12 йылын әсәйем менән дә ҡуша торорға, өҫтәп, тағы туған тейешле кешенең 5 балаһын да алып тәрбиәләргә тура килде. Ололар һикһәндә үтеп, баҡыйлыҡҡа күстеләр. Балалар үҫте. Иремә яратып барғас, тормошобоҙҙоң бөтә ауырлығын да күтәрҙем, үкенмәйем. Ҡәйнәмде башҡа балалары алырға теләмәнеләр, ә беҙ көсләшмәнек.

Ниндәй ауырлыҡ күрмәйһең бала үҫтергәндә, тимәк, ҡәҙергә уның хаҡы бар. Минең иң аңлап та, төшөнөп тә етә алмаған нәмәм - ризыҡ ҡыҙғаныу. Ошо юҫыҡта ғауға сығыу ғына түгел, үпкәләшеп, килешә алмай оҙаҡ йөрөгән кешеләр ҙә бар. Йә булмаһа, олоғайған кешенең онота торған ҡылыҡтары йыш күҙәтелә, хатта яңылышыуға дусар булғандар ҙа байтаҡ. Бына шундай хәлде лә килендәр оло ғәйеп итеп ҡәйнәгә таҡҡан осраҡтар юҡ түгел. Әйтке килә: шул йәшкә етһән, үҙең ни эшләрендә белерһеңме? Склероз, тигән ололарға хас һыҙат бар, унан ғәйеп табыу кәрәкмәй.

Миненсә, һәр ғаилә ҡыҙын сит ояның ҡото булырлыҡ, таҫтарлы, хәстәрле ҡатын булырлыҡ итеп тәрбиәләргә тейеш. Ә буласаҡ ҡәйнәләр, улының яратып алған ҡыҙын үҙ ҡыҙындай ҡабул итергә үҙен алдан әҙерләргә тейештер. Мин дә ҡәйнә булғаныма 25 йыл, әле бер ауыҙ һүҙ менән дә тауыш күтәрешкән юҡ, ә бына донъя, ғаилә хәлдәре тураһында ихлас әңгәмә ҡорорға тырышам. Тормош - бумеранг, уны нисек ташлаһаң да, ҡәйелеп килеп алдыңа төшә. Ҡәйнә ололарса аҡыл бирерҙәй кеше була белһә, килен кәңәшкә мохтаж кесе булып, уны тыңлай белһә, кәрәкмәгән әсәй, ҡәйнәләр булмаҫ ине, тип уйлайым

**Рәйсә ИСӘНБАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

✓ *Мин дә был хатҡа ҡул ҡуйҙым. Шунан башланды... Бөтәбеҙҙе лә тиерлек берәм-берәм сүпләнеләр. Мин башымды эйеп, ғәфү һорап, ҡаршыларына барманым. Шуға ла ғүмер буйы баш осомда күсәк - обком күсәге торҙо.*



*ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!*

**Яҙыусы Ғәли Ибраһимов Салауат Юлаевтың замандашы һәм арҡаҙашы Кинйә Арыҫланов хаҡында "Кинйә" романын ижад иткәс, Башҡортостан телевидениеһында был роман буйынса телефильм төшөрөү - оло мәҙәни ваҡиға, ижади ҡаһарманлыҡ була. Тәрән тарихи белемле, сая рухлы әҙиптең әҫәре буйынса "Кинйә" телесериалын әҙерләүҙә төп роль уйнаған кеше - ул сценарий авторы Фуат Ғибаҙулла улы БИИШЕВ (1928-2008). Уның тураһындағы хәтирәләрҙе барлайыҡ әле.**

# ТУҒАН ТЕЛ ТЫЛСЫМЫН...

## тамашасыларға тапшырыусы булды ул

Шулай итеп, башҡорт тел- ендәге тәүге тәҫлә дүрт сериялы "Кинйә" телефильмы - ул башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшен сағылдырған, тарихи аманатҡа тоғролоҡ билдәһе булған йәнә бер әһәмиәтле сара. Сценарий авторы - Фуат Биишев. Режиссеры - Әмир Абдразаҡов. Ҡуйыусы режиссеры Рафаэль Биккинин. 1986 йылда бөтә Башҡортостан халҡы яңы киноәҫәрҙе телевизор аша тын да алмай ҡарай, Емельян Пугачев етәкселегендәге 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышын йәки Салауат яуы тип тарихҡа ингән оло ваҡиғаларҙы һәм халыҡ батырҙарын күҙ алдынан үткәрә.

Үткер фекерле, оҫта телле журналист Фуат Биишевтың илһамлы һәм егәрле режиссер Әмир Абдразаҡов менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләүе - бөтә Башҡортостан телевидениеһы студияһы өсөн отошло тандем, бәхетле осраҡ булды, тиергә мөмкин. Уларҙың телевидение фондында һаҡланған төп мираҫы - башҡортса тәүге нәфис телефильмдар. Иң тәүге ижади емеш - 1978 йылда Янибай Хамматовтың "Бөртөкләп йыйыла алтын" романы буйынса беренсе күп сериялы телеспектакль аҡлы-ҡаралы видеотаҫмаға яҙыла. Сценарий авторы - Фуат Биишев. Режиссеры - Әмир Абдразаҡов. Ҡуйыусы операторы Рафаэль Биккинин. Әҫәр Башҡортостандағы алтын йыуыусы старателдәрҙең ауыр тормошо, революция һәм граждандар һуғышы шауҡымынан ил өҫтөнә ишелгән һынауҙар хаҡында. Ватансыл рухлы шәхестәр - сценарий авторы менән режиссерҙың башҡорт тарихын һәм милли характерын телеэкранда сағылдырыу хыялы тормошҡа аша. Был сериал хаҡында оператор Рафаэль Биккинин бына нимә ти: "Алтын" ("Бөртөкләп йыйыла алтын" фильмының эш өсөн шартлы исеме) - ғәжәп ҙур хеҙмәт һалынған ижади бейеклек. Фуат Ғибатович телеэкран өсөн бик тә оҫта яҙа белә. Биишев - ул һүҙ маһиры. Ҡуйыу, уйнау, төшөрөү эше ифрат күп һәм ҡатмарлы булды, ләкин тамашасы ҡәнәғәт ҡалды, һөйөнөп ҡараны. Һунынан "Кинйә" тыуҙы. Унығы инде - үҙе бер эпоха, үҙе бер оло тарих..."

Был яуаплы ижади көндәр хаҡында режиссер Әмир ағай Абдразаҡов үҙе бик асылып һөйләр ине: "Кинйә" фильмы өҫтөндә эшләп булыр микән, тигән һорау ныҡ борсоно. Бер тин аҡса юҡ, ней кейем, ней аттар - һәммәһен дә үҙебеҙ таптыҡ, үҙебеҙ юлланыҡ. Актерҙар һайлау ҙа ҡатмарлы булды. Тарихи шәхесте һынландырыу - уғата яуаплы, уны үҙе шәхес булған заттар ғына күтәрә ала. Романдан киносценарий эшләү - үҙе бер оло дарья, уны кисеп сығыуы - ай-һай... Бары тик талантлы оҫталар ғына атҡарылыҡ эш. Биишев йөрәге, Биишев ҡарашы менән айҡап сығылды ул тарих. Төп фекер - Фуат ағайҙыҡы. Уның менән эшләүе енел. Ул үҙ өҫтөнә бөтә ауырлыҡты алды - киносәхнәләр, диалогтар ҙур оҫталыҡ менән яҙылды. Әйтергә кәрәк, Башҡортостан телевидениеһында Яңы йыл "Огонёк"тарының сценарийҙарын яҙыуҙа ла Фуат ағай ҡотҡара торғайны. Әлдә беҙҙең яҙмыш юлдары бергә тура килде. Бик күп нәмәгә өйрәтте мине Фуат ағай. Телгә, эш тәртибенә, әҙәпкә өйрәтте. Башҡа кеше, башҡа рух булһа, белмәйем, мин телевидениела нимәләр эшләй алмаҫ инем. Уға бик рәхмәтлемен..."

Ысынлап та, бер-береһенә таяныып ижад итеүсе башҡорт зыялыларының тоғро дуҫлығы ил өсөн, республика мәҙәниәте өсөн бик файҙалы булды. Фуат Биишев әҙерләгән әҙәби тапшырыуҙарҙың тексы телевидение дикторҙары өсөн дә һабаҡ, башҡортса дөрөҫ һөйләргә өйрәнеү дәрестәре ине. Туған тел тылсымын белгән журналистың яҙғандарын Марат Рафиҡов, Ғәлимнур Бикбулатов, Рәсимә Кәримова, Наилә Ғәләүетдиноваларҙың аһәнле тауышы зәңгәр экран аша халыҡҡа еткереп торҙо. Башҡорт теленең моңон, һүҙ байлығын, телмәр ағышын белеп һөйләргә өйрәтте ул. Был осорҙа башҡортса тапшырыуҙар ҡолаҡҡа ятышлы, күңелдә үҫтереүсе, фекерҙе тәрәнәйтеүсе, уй-хисте байытыусы әҙәби телдә яңғырай торғайны.

Фуат Ғибаҙулла улы Биишев үҙе бик тә баҫалҡы холоҡло кеше ине. Ләкин һүҙ туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башҡорт милли рухы һәм тарихы хаҡында барһа, унан да сая, үткер һәм ҡыйыу кеше булманы. Үҙе тураһында һөйләргә бөтөнләй яратмаһа ла, бер саҡ үҙ ижадына шулай тип байҡау яһағайны: "Талапсан булырға, халыҡ телен файҙаланырға, ҡоро гәзит теленән ҡасырға тырыштым. Элек тапшырыуҙар, ғөмүмән, етдирәк ине. Заман шуны талап итте. Тапшырыуҙар кешене әҙәпкә өндәй, юлдан яҙҙырмай торған, әҙәп ярһыны зыян итерлек булмай торғайны. Был традицияға беҙҙең телевидение тоғро ҡалырға тырышты. Контроль дә көслө булды. Контроль кәрәк ул. Бөгөнгөләй шылтыр-мылтыр тапшырыуҙарға юл ҡуйылмай ине. Хәҙер ҙә контроль бар, тик кем аҡса түләй, шул контроль яһай. Аҡса тоғо заказ бирә..."

Өлкә комитет контроле, партия цензураһы ни тиклем генә ҡаты булмаһын, Фуат Биишев әҙерләгән телеочерктар һәм телефильмдар ил-ауыл, хужалыҡтар тормошон, әҙәби-мәҙәни ваҡиғаларҙы дөрөҫ һәм тулы сағылдырыусы ғына түгел, ваҡытында күреп баһалаусы ла ине. Башҡорт телендә әҙәби-драматик тапшырыуҙар гөрләп торған үҙе бер дәүер булды ул саҡ. Фуат Биишевтың геройҙары - ауыл кешеләре һәм яҙыусылар, шағирҙар, йәғни туған телдә тулы һәм матур һөйләүселәр. Һәр йортағы зәңгәр экрандан халыҡсан, ябай һәм ихлас тел яңғырап тороуы Башҡортостан телевидениеһының әҙәби-драматик тапшырыуҙарына бәйле ине. Ул ойоштортан "Туған төйәк", "Яҙыусы трибунаһы", "Шиғриәт минуттары"нда әҙиптәрҙең ялҡынлы һүҙе, уй-фекере халыҡҡа даими барып етә торҙо.

Шулай ҙа ул үҙенең иң мөҡәддәс уй-ниәттәрен тормошҡа ашырырға ашыҡты. Коммунистар партияһы һис кенә лә хупламаған төп эштәре, төп темалары бар ине уның. Был хаҡта ул берҙән-бер интервьюһында коллегалары алдында әйтеп һалды: "Башҡортостан дәүләтен төҙөүселәр тураһында яңы махсус очерктар циклы кәрәк. Зәки Вәлиди генә түгел, уға тиклем дә, унан һуң да Башҡортостан дәүләте өсөн ғүмерен арнаған шәхестәребеҙ хаҡында халыҡ белергә тейеш - Харис Йомағолов, Сәғит Мирас, Шәриф Манатов, Әхмәҙулла Бейешевтар тураһында ентекле тарихи телефильмдар төшөрөргә ваҡыт..." Уның был фекерҙәре 2000 йылдарҙа уҡ яңғыраны.

Әҙәби-драматик тапшырыуҙар редакцияһының баш мөхәррире Фуат Биишевтың мөхәррирлек талапсанлығы хаҡында тотош легендалар йөрөй. Ул үҙенең ҡул аҫтындағы йәш журналистарҙың яҙмаларын ҡыҙыл ҡәләм тотоп тикшерә, һыҙа, төҙәтә, өйрәтә торғайны. Күренекле башҡорт тележурналистары Альда Вәлиева, Әлфиә Батталова, Хәлисә Мөхәмәҙиева, шулай уҡ мин дә уны үҙебеҙҙең остазыбыҙ тип һанайбыҙ. 2003 йылда, етмеш биш йәше тулған көндәрҙә, беҙ ветеран-журналист Фуат ағайҙы Башҡортостан телевидениеһының Ҙур студияһына саҡырғайныҡ. Ошо студияла ул яҙған сценарийҙар буйынса тиҫтәләрсә телеспектаклдәр уйналған, йөҙҙәрсә яҙыусылар, шағирҙар һәм төрлө хеҙмәт әһелдәре сығыш яһаған. Баҡһаң, Фуат ағай үҙе студияла беренсе мәртәбә интервью бирә, тәүге тапҡыр камера алдында һөйләй



икән. Һәр ваҡыт кадр артында ҡалған автор, мөхәррир һәм журналисты коллегалары, уҡыусылары, операторҙар ололап ҡаршы алды. Телевидение режиссерҙары Рафаэль Арыҫланов уны "тележанрҙар оҫтаһы" тип нарыҡлай. Альда Вәлиева өсөн "Фуат ағай - оло йөрәкле ир-егетлек үрнәге". Хәлисә Мөхәмәҙиева өсөн "Фуат Биишев мәктәбе - ул Оҫталыҡ өлгөһө", ә Әлфиә Батталова билдәләүенсә, "Фуат ағай һабаҡтары - милли кадрҙар әҙерләү усағы" булып тора. Шәхсән минең өсөн "Фуат Биишев - ул телеэкрандың башҡорт теле уҡытыусыһы". Журналист - ул, ғөмүмән алғанда, индивидуалист, үҙ стиль-ҡалыптары, үҙ ысулдары менән башҡаларҙан айырылып торорға ынтыла. Теге йәки был журналистың уҡыусылары, шәкерттәре булыуы, уның эш принциптарын, идеяларын, юлын дауам итеүселәре хаҡында әллә ни ишетелгәне юҡ. Әммә тележурналистика ветераны Фуат Биишев - үҙе артынан уҡыусыларын өйрәтеп ҡалдырған, һәләтле һәм имանлы йәштәрҙең талапсан уҡытыусыһы булыу яуаплылығын йөкмәгән шәхес.

Фуат Биишев үҙенең һикһән йәшенә саҡлы һис әҙләкһеҙ ижад итте, шиғырҙар яҙҙы, иҫтәлектәрен барланы. Үҙенең ижад юлына бик тә талапсан булды һәм ҡоро ғына баһа бирер ине. Ысынлап та, "Кинйә" телефильмы геройҙарын, халыҡ батыры Кинйә Арыҫланов, Салауат Юлаев рухын экранға күсергән Фуат Биишевтың йәнә бер фәһемле эшмәкәрлеге - тәржемә эше, йәғни башҡорт теленең бөтә нескәлектәрен белеп эш итеү, уның төрлө өлкәлә терминдарын булдырыуҙа үҙ өлөшөн индереү, тәжрибәһе менән уртаҡлашыу оҫталығы ла булды. Шул уҡ ваҡытта уға әҙәби эш тә бик таныҡ ине. Тележурналистың тынғыһыҙ, осо-башы күренмәгән мәшәҡәтле дәүере артта ҡалып, хаҡлы ялға сыҡҡас, ул үҙенең атаһының, Зәйнәб Биишева трилогияһы геройы Иштуғандың, ә ысынында уҡытыусы-мәғрифәтсе Ғибаҙулла Биишевтың көндәлегенән хасил булған "Ғүмер ярсыҡтары" хәтирәләрен барлап, "Ағиҙел" журналында баҫтырҙы. "Үткән йылдар, уҙған юлдар" тигән исем менән үҙенең дә донъяуи иҫтәлектәре баҫылып сыҡты. Был яҙмаларҙа Фуат Биишев - яҙыусы, романдар авторы булырҙай әҙип икәнен күрһәтте. Мин бер саҡ унан: "Нинә яҙыусы булманығыҙ?" - тип һораным. "Мин яҙыусы булманым, журналистикаға киттем. Заманында бер төркөм йәш ғалимдар Сәйфи Ҡудашҡа халыҡ шағиры исемен биреүгә ҡаршы сыҡты. Мин дә был хатҡа ҡул ҡуйҙым. Шунан башланды... Бөтәбеҙҙе лә тиерлек берәм-берәм сүпләнеләр. Мин башымды эйеп, ғәфү һорап, ҡаршыларына барманым. Шуға ла ғүмер буйы баш осомда күсәк - обком күсәге торҙо. Эстафета буйынса тиерһең, һәр яңы килгән түрә минә шикләнеү менән ҡараны. Минең эшемдә лә, үҙемдә лә күрмәскә, инҡар итергә тырыштылар. Шулай итеп, обком менән "дуҫ" йәшәнем..."

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә ниндәй өлөш индерһә, Фуат Биишевтың журналистик эшмәкәрлеге лә быуын-быуын йәштәрҙе һәм замандаштарҙы туған тел хазинаһына, туған халыҡ тарихына, сәнғәтенә, матур кешеләренә, яҡты киләсәгенә әйҙәп тороусы ижад булды. Туған халҡын һәм илен өсөн көндәлек төплө хеҙмәткә өйрәтеүсе, әйҙәүсе ижад. Зәңгәр экран аша Фуат Биишевтың уй-хыялдары, кешегә әйтер һүҙе халҡына барып етеп торҙо, Аллаһыға шөкөр. Заманаһың был бөйөк мөмкинлеген намыҫ менән башҡарыусы әҙип ул - атаҡлы журналист Фуат ағай Биишев. Бейешевтарҙың аҫыл затының ҡотон арттырыусы, аманатлы антына тоғро ҡалыусы остаз һәм ил ағаһы.

Әйткәндәй, "Кинйә" телесериалының дауамын эшләргә шул хәтлем ашҡынды Әмир ағай Абдразаҡов. Ҡайҙа, кемде, нисек һәм нисәлә төшөрөү хаҡында эш картаһын беҙҙең "Хазина" ижад берекмәһе бүлмәһендә әллә нисә мәртәбә йәйеп һалып, күрһәтеп, хыялдары менән уртаҡлашып ултырыр ине. Уға таяныс: ҡулында Фуат ағай Биишев әллә ҡасан яҙып биргән әҙер киносценарий. Бына тигән әҫәр авторының, арҙаҡлы Ғәли Ибраһимовтың рухына таянып, заман талабы тип ялбарып, ул телефильм өсөн аҡса юлланы. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уға ярҙам итерҙәй бер кем дә хөкүмәттә лә, илдә лә табылманы. Халыҡ тарихы буйынса телесериал бүтәнсә төшөрөлмәне. Утыҙ биш йыл үтте. Башҡорт тарихи кино һәм телесериалдары үҙ сәғәтен көтә.

**Сәрүәр СУРИНА.**

✓ *Ҡурай фәҡәт башҡорт ерлегендә генә ҡурай булып ҡала ала. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул, иң беренсе, үҙен башҡорт тип белгән, тойған, йәғни, башҡорт рухлы халыҡтың булыуы.*

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

**Ҡаҙан ҡалаһының мең йыллығы айҡанлы нәшер ителгән "Татарстан - халыҡ рухы" китабында гөрөф-ғәҙәттәр бүлеге мәшһүр ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ҡурайҙа уйнап төшкән фотоһы (башҡорт милли кейемендә түгел, ябай кейемдә төшкән) менән асыла (һүрәттә). Бирелеп уйнай ҡурайсы, бөтөн ҡиәфәтенән рух бөркөлә, китаптың исемендәге рух һүҙен ҡеүәтләрҙәй иң рухлы фотоһүрәт, бәлки, ошолор ҙа. Һүрәте бар, исеме яҙылмаған. Татар, рус, инглиз телдәрендә сыҡҡан был матур, күҙҙең яуын алып торған баҫманы ҡараған халыҡтың күбеһе, әлбиттә, 1984 йылда 56 ғына йәшендә ғүмере фажиғәле өҙөлгән мәшһүр ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтовты белмәй (милли кейемдә төшмәгәс, милләте лә күренмәй), фотола татар халҡының "гөрөф-ғәҙәттәр"ен, дөрөҫөрәге Татарстан халҡының рухын кәүҙәләндереүсе "символ"ды күрә.**

# ҠУРАЙСЫ




Бына шулай, "күршеләр" ҡурайыбыҙҙы ғына түгел, бөйөк ҡурайсыны үҙләштереүҙән дә тартынмай. Был күренештең икенсе яғы ла бар бит әле: Ҡаҙандың мең йыллығына арналған "Татарстан халыҡ рухы" китабында Ишмулла Дилмөхәмәтовтың фотоһының баҫылыуы, асылда, Ҡаҙан тарихында ҡурайсы булмауын таныу ҙа бит ул. Ә инде күптән яҡты донъянан киткән мәшһүр ҡурайсының фотоһүрәтен үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыуға ҡарата башҡортса һүҙ табыу ҡыйын хатта...

Татар яҙыусыһы Мирсәй Әмириҙең "Ҡурай" тигән хикәйәһе Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында булған хәл нигеҙендә яҙылған: "...Траншеялар буйлап командирҙар блиндажына үтеп барыусы майор Әйүповтың аҙымдары ҡапыл әкренәйҙе. Ниндәйҙер моң ишетелеп ҡалғандай булды уның ҡолаҡтарына. Ниндәйҙер бик-бик таныш, йөрәк өҙгөс моң ине ул.

Майор урынынан ҡуҙғалды. Командирҙар блиндажына бармайынса, ҡурай тауышы килгән яҡҡа йүнәлде ул. Блиндаж эсендә ҡыҙылармеец менән бер сержант йәшел ҡамыш түшәлгән һике өҫтөндә уйға ҡалған. Улар ҡаршыһында башҡорт егете, ҡара ҡаштарын һикертә-һикертә, ярһып ҡурай тарта ине...

Майор килеп инеүгә, һуғышсылар аяғөҫтө баҫты, ҡурайсы туҡталды. Майор уларҙы тынысландырырға ашыҡты:

- Уйнағыҙ, уйна, туҡталмағыҙ, - тине ул ҡурайсыға.

Ләкин ҡурайсы уйнарға ҡабаланмаһы, оялып, ҡыҙарынып китте.

- Юҡ, иптәш майор, рәтле сыҡмай, беҙҙең яҡ ҡурайҙары юҡ шул бында. Айыу ҡурайынан ғына маташтырғайным. Ҡыҫҡа.

- Бик һәйбәт сыға. Ҡайһы яҡтыҡы үҙен?

- Башҡортостандан. Баймаҡ районы "Салауат" колхозыныҡы. Йылайыр һыуы буйынан...

- Исемең нисек?

- Йомағужа Маликов тиҙәр.

Блиндаж эсендәге өс кешенең береһе - үзбәк, икенсеһе рус ине. Эйе, ҡурай - башҡорт музыкаһы. Ә Башҡортостан - Совет иле. Башҡорт егете Украина өсөн дә, Украина егете Башҡортостан өсөн дә һуғыша. Икеһе лә тыуған ерҙәренән йыраҡта - Төньяҡ-Көнбайыш фронтында тороп илдәрен һаҡлай. Шуға күрә ҡурай башҡортҡа ла, русҡа ла, татарға ла, украинға ла берҙәй тәьҫир итә. Уларҙың барыһын да немецтан үс алырға саҡыра. Эйе бар һуғышсылар ҙа ишетһен уның саҡырыуын".

Артабан Мирсәй Әмири Йомағужа Маликовтың, дивизия политбүлегенең үтенесе буйынса алюмин көпшәнән ҡурай яһап, оборонала ятыусы һуғышсыларҙы ҡурай уйнап рухландырғаны, танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡ тотоп, дошмандың һөжүменә ҡаршы торғанда яраланыуы, шунда алюмин ҡурайын юғалтыуы, госпиталдә еҙ ҡурай яһап, яралыларҙың хәлен еңеләйтеүе тураһында яҙа. Хикәйә 1943 йылдың апрель айында яҙылған. Хикәйәләге майор Әйүпов Мирсәй Әмириҙең үҙе икәнен аңлауы ҡыйын түгел. Ә Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы егете, ҡурайсы Йомағужа Рәхимйән улы Маликов 1943 йылдың 17 декабрендә батырҙарса һәләк була... Бөйөк Ватан һуғышында Йылайыр районынан Ишкәле Дилмөхәмәтов, Бөрйәндән Мөхәммәт Ҡәҙерғолов һ.б. ҡурайсы-яугирҙарҙың да командованиеның үтенесе буйынса алғы һыҙыҡта динамиктарҙан ҡурайҙа уйнағаны билдәле.

Ҡурай, беҙҙенсә, тап Мирсәй Әмириҙең хикәйәһендәге мәғәнәлә, рухи юҫыҡта Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикаһында урын алды.

Татар халҡының шулай уҡ арҙаҡлы шәхестәренең береһе Гөлшат Зәйнәшеванын йыр юлдары күңелгә килә:

*Һағынырмын Уралтау буйҙарын,*
*Тын кистәрен, ҡурай моңдарын.*
*Һағынырмын алһыу таң атҡанда*
*Яңғыраған башҡорт йырҙарын...*

Башҡорт халҡына, ҡурай моңона ҡарата ни хәтле һөйөүгә мөлдөрәмә тулы һүҙҙәр! Шағирә нисек нескә тоя: Урал, ҡурай, башҡорт төшөнсәләре - айырылғыһыҙ!

Бөгөн Мирсәй Әмири, Гөлшат Зәйнәшева кеүек халыҡтар дуҫлығының ҡәҙерен белгән зыялыларҙың аҡыллы һүҙҙәре, бәлки, ике туғандаш халыҡтың араһына шына ҡағыуға булышлыҡ иткән ҡурай тирәһендәге ығы-зығыға кәртә ҡуйыр ине...

Ҡурай сәнғәте - бөйөк сәнғәт, быуаттар буйы мәшһүр ҡурайсыларыбыҙ күтәргән бейеклектән уны бер нисек тә түбән төшөрөү мөмкин түгел инде. Ҡурай фәҡәт башҡорт ерлегендә генә ҡурай булып ҡала ала. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул, иң беренсе, үҙен башҡорт тип белгән, тойған, йәғни, башҡорт рухлы халыҡтың булыуы. Ерлек - ул ҡан аша күсә килгән беҙҙең тарихи хәтеребеҙ, рухи ҡиммәттәребеҙ. Ерлек - ул беҙҙең тарихыбыҙ, көйҙәребеҙ. Беҙ тарихи көйҙәребеҙҙе, йырҙарыбыҙҙы хәҙергегә килтереп еткергән ҡурайсыларыбыҙҙың исемдәрен беләбеҙ.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең "Урал" поэмаһында асылда башҡортлоҡто ҡурайға тиңләй:

*Башҡортлоҡ - ул милләт кенә түгел,*
*Ҡурай кеүек ябай, ҡатмарлы.*
*Ерҙә әле рух бар - халыҡ рухы,*
*Ҡабул итмәй ул рух юк-барҙы.*

Ҡурайға ымһыныу сәбәпле ығы-зығы күтәреүселәр, асылда, кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәтте инҡар итә: ҡурайҙы башҡорттан, башҡортто ҡурайҙан айырып булмай. Ҡурай башҡорт ерлегенән айырылһа, биш тишекле һыбыҙғыға әйләнә, ә унда уйнаусы - һыбыҙғысы. Һыбыҙғысының хатта күкрәккә һалып та, өҙләп тә уйнарға өйрәнеүе, башҡорт халыҡ көйҙәрен һуҙыуы ла мөмкин, әммә нисек кенә тырышмаһын, ҡурайсы була алмаҫ, сөнки, Назар Нәжми әйтмешләй, ерҙә әле рух бар - халыҡ рухы, ҡабул итмәй ул рух юк-барҙы.

Атай-олатайҙар ҡаны менән яҙылған башҡорт тарихын бөтә йөрәге менән тойоп, шул тарихты ҡурай теле менән һөйләй алыу көзрәтенә эйә шәхес кенә Ҡурайсы тигән оло дәрәжәгә лайыҡ була ала.

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ.**

**(Мәҡәләнең тулы вариантын "Ағиҙел" журналының 2020 йылдың 1-се һанында уҡығыҙ).**

*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*

**Ҡайһы берҙә тормошҡа, эргә-тирәләге кешеләребеҙгә артыҡ талапсан булып китәбеҙ. Беҙгә нимәләр етмәй кеүек. Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаев әйтмешләй, ҡара икмәк булһа, аҡ етмәй, шыуышып йөрөгән саҡта - аяҡ, йәйәү йөрөгән саҡта - ат етмәй, аты булһа - машинаһы, осор өсөн ракетаһы, планетаһы, күге... Эҫе булһа, ҡасан ҡыш етә инде, тибеҙ. Һыуыҡта йәйҙе һағынабыҙ, бер-ике көн яумаһа, эҫегә тонсоғабыҙ, ямғыр яуһа иһә йәнә йонсойбоҙ. Аҙым һайын, минут һайын ҡәнәғәтһеҙлегебеҙҙе белдереп кенә торабыҙ.**

# БӘХЕТЛЕНЕҢ КӘМӘҺЕ...

Бер көн шулай магазинда торам. Минән алдағы ҡатын һатыусының башын әйләндерҙе генә:

- Һеҙҙә йәшел алма бармы ул?

- Бар, бар, - һатыусы хаҡын әйтте һәм ҡулына берике алма тотоп, һатып алыусыға өндәште. - Күпме үлсәргә?

- Ә ҡыҙылы бармы?

Яуап тағы ыңғай булды.

- Ниндәй сорт икән? "Айдаредо" түгелме?

- "Айдаредо" ла бар.

- Юҡ, юҡ, ул кәрәкмәй. Уларҙың хәҙер файҙаһы юҡ бит. Ә әфлисун ҡайҙан? Марокконанмы?

- Юҡ, Ырымбурҙан килтерҙеләр.

- Улай булғас, кәрәкмәй, - һатыусының кинәйәһен аңламаны был.

- Һары алмалар юҡтыр инде.

Кәштәлә һары алма тулып ятһа ла, һатыусы, ҡатындың барыбер бер нәмә лә алмаясағын аңланы булһа кәрәк, "Бөткәйне шул", тине лә уның артында торған балаға ҡараны. Ханым банан, грейпфрут һәм тағы ла нәмәләрҙендер хаҡын һораны ла, магазиндың бик уҡ бай булмауын билдәләп, үҙе көйҙәлгән арала байтаҡ ҡына йыйылған сираттан ашыҡмай ғына сығып китте. Бына шулай, беҙҙең үҙебеҙҙең дә был тормошта нимә кәрәккәнен, нимә етмәгәнен белмәгән саҡтарыбыҙ була.

Аяҡ кейемдәре магазинында эшләгән бер һатыусының да зары иҫкә төштө.

- Күптәр һатыусылар "ятып ҡалғансы, һатып ҡал" тигән принцип менән эшләй, тип уйлай. Мин үҙем бер ваҡытта ла теге йәки был аяҡ кейемен һатып алырға бер кемгә көсләп таҡмайым. Йыш ҡына арзан да, матур ҙа, сифатлы ла аяҡ кейемен һорайҙар. Ундайҙар юҡ, тип шунда уҡ әйтәм. Арзан да, сифатлы ла булһын, имеш. Сифатһыҙ кейем алалар ҙа, күп тә үтмәй, тауарҙарын тотоп килеп еткәләр, йә алмаштырығыҙ, юғиһә, мин ҡайҙа кәрәк, шунда мөрәжәғәт итәм, тип янап, "мәтриләп" китеүселәр күбәйҙе. Һатып алыусыларҙың, йәғни ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлайҙар ҙа ул, ә һатыусыларҙы ошондай мыжыҡ, тупаҫ һатып алыусыларҙан бер кем дә яҡламай, - тигәйне ул.

Эйе, беҙҙә клиент һәр ваҡыт хаҡлы. Бер быуат элек әйтелгән был фраза, хәҙер афоризмға әйләнеп, хеҙмәтләндереүҙең төрлө өлкәһендә иң йыш яңғыраған ҡанатлы һүҙҙәрҙең береһе. Әммә тәрбиәлелекте, мәҙәнилекте, башҡаларға ихтирамлы мөнәсәбәтте бер кем дә инҡар итергә тейеш түгел, минеңсә. Кеше күңелен өйрәнеүсе белгестәр - психологтар әйтеүенсә, был тормошҡа дәғүәһе, талабы ҙур булғандар эргә-тирәһендәгеләр генә түгел, үҙе менән дә ҡәнәғәт була белмәй. Тап шундайҙар сиратта, транспортта, магазинда үҙенең асыуын кешегә төшөрә лә инде.

Күңелһеҙлектәрҙе, юғалтыуҙарҙы, хатта ҡайғыларҙы ҡабул итә белгәндәр генә башҡаларҙың шатлығын да, ҡайғыһын да үҙенекеләй күреп, бар нәмә менән килешеп, гармонияла йәшәй. Тормош ҡәҙерен, мәңгелек ҡиммәттәрҙе белә. Ундайҙарҙы бәхетле, тип атайҙар. Ундайҙарҙың кәмәһе хатта ҡорола ла йөҙә, тиҙәр...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

***✓ Прививка эшләтер алдынан кеше үҙенең участка врачына мөрәжәғәт итергә, анализ бирергә, анкета тултырырға тейеш. Яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцина ике этапта яһала.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



## ЯРҘАМСЫЛДАР...

■ Кешеләргә ярҙам итергә атлығып торһағыҙ, тимәк, альтруистһығыҙ, фән телендә ундайҙарҙы шулай тип атап йөрөтәләр. Вашингтондағы баш мейеһе институты белгестәре билдәләүенсә, альтруистарҙың 90 проценты бары тик үҙенең мәнфәғәттәренән сығып эш итә. Ғалимдарға быны асыҡлау өсөн бер нисә психологик һәм социаль тикшеренеүҙәр үткәрергә тура килә. Иң ҡыҙығы, альтруистар кешеләр алдында ғәйеп тойғоһо кисерә, шуға ла ярҙамға килә икән. Уларҙың бары тик 2 проценты былай ғына ярҙамға килә һәм бының өсөн бер нәмә лә көтмәй.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Индиана штаты университеты ғалимдары кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында сәләмәтлек өсөн зыянлы матдәләр тапҡан. Улар кешелә эндокрин һәм нейрон тайпылыштарына, һимеҙлеккә килтерә, кешенең репродуктив фукнцияһына ағыулы тәьҫир яһай ала. Ғалимдар билдәләүенсә, пластик, ағас материалдар, текстилгә өҫтәлгән антипирендар биосферала һәм тере организм туҡымаларында туплана ала. Был матдәләр кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында күберәк булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙа антипирендар күләме юғарыраҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, был тырнаҡ өсөн лак ҡулланыуҙан булыуы ихтимал, сөнки антипирендар лак составында ла бар.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, артыҡ таҙалыҡҡа ынтылыу иммунитет түбәнәйеүенең һәм аллергия барлыҡҡа килеүенең бер сәбәбе булып тора. Был фекер 1989 йылда уҡ Лондондың Изге Георгий госпитале эпидемиологы Стрэхан тарафынан әйтелә. Профессор таҙа һыу ҙа булмаған төбәктәрҙә йәшәгән балаларҙың ауырыуҙарға бирешмәүен, ә йәшәү шарттары яҡшы булғандарҙың аллергиянан яфаланыуын күрә. Күп балалы ғаиләләрҙә лә балалар ауырып бармай. 2014 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бәләкәй сағынан уҡ тәбиғәткә сыҡҡан, тупраҡ-таш менән уйнаған бала аллергия һәм астма менән һирәгерәк ауырый. Хатта аш бүлмәләрендә тараҡан, сысҡандар, фатирҙарында йорт хайуандары булған балаларҙың сәләмәтлеге стериль торлаҡта көн итеүселәргә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡҡан.

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллекттары юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас уны иҫләмәүҙәре тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы ентекләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# БЫЛ СИРҘЕ...

## вакцина менән еңәбеҙ




**Рәсәй Федерацияһының бөтә төбәктәрендә, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһында COVID-19 яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакциналау дауам итә.**

Мәғлүм булыуынса, прививка кампанияһы республикала үткән йылдың декабрь айында уҡ старт алғайны. Тәүҙә ул медицина, педагогия, социаль өлкә, полиция, күп функциялы үҙәк хеҙмәткәрҙәренә һәм ирекмәндәргә генә тәғәйенләнде. Вакциналау мәсьәләһе бөгөн донъяның башҡа ҡитғаларында ла иң көнүҙәктәрҙән иҫәпләнә. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларынан көн һайын ишетеп-күреп торабыҙ. Йәшерен-батырыны юҡ, дуҫтарыбыҙ, хеҙмәттәштәребеҙ, таныштарыбыҙ менән һөйләшеүҙәребеҙҙең дә төп темаһына әйләнде ул. Вакцинаға ҡағылышлы, дөрөҫөрәге, уны яһатыу һәм эҙемтәләре хаҡында фекерҙәр төрлө булыуына ғәжәпләнергә түгел. Ни тиһәң дә, әлегә был прививка һынау осоро үтә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы мәғлүмәттәр буйынса уның һөҙөмтәлелеге 91,4 процент тәшкил итеүе билдәле.

Тарихтан мәғлүм булыуынса, төрлө дәүерҙә кешелеккә һынау булараҡ төрлө йоғошло сирҙәр барлыҡҡа килеп тора. Уларҙың таралыуын тик бөтә халыҡты вакциналау юлы менән генә еңгәнде, иҫкәрткәнде оноторға ярамай. Коронавирусты ла прививка яһатып ҡына туҡтатып булыуы бөтәһенә лә мәғлүм ки. Тик уны берәм-һәрәм түгел, ә дәррәү, бөтә республика, ил, планета менән үткәрергә кәрәк. Республика Башлығы Радий Хәбиров коронавирустың таралыуына юл ҡуймаҫ өсөн беҙгә республика халҡының кәмендә 2/3 өлөшөн вакциналау мөһим, тине. "Рәсәй 24" телеканалына биргән интервьюһында ул республикала вакциналауға әҙерлек һәм ковидҡа ҡаршы паспорт хаҡында ентекле мәғлүмәт бирҙе. Иң беренсе ковидҡа ҡаршы паспорт хаҡында аңлатып үтәйек.

Был проектты февраль башында башлап ебәреү планлаштырылғайны. Уның операторы функцияһын Башҡортостандың Һанлы үҫеш министрлығы башҡара - паспорт һанлы, QR-код рәүешендә була. Уны алыу өсөн Дәүләт хеҙмәттәре порталында шәхси кабинетыңды теркәргә кәрәк. Проекттың асылы шунда: ковидтан прививка яһатҡан кеше өҫтөнлөктәргә, льготаларға, ташламаларға эйә була һәм эпидемияға ҡаршы саралар сиктәрендә индерелгән сикләүҙән азат ителә.

Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта республика 18,84 мең доза "Спутник V" вакцинаһы алды, февралдә - 50,8 мең, мартта 100,7 мең доза килтереүҙәре көтөлә. 72 медицина учреждениеһы вакцинаны һаҡлау өсөн ҡорамал менән тәьмин ителгән, улар прививка пункттары булараҡ эшләргә мөмкин. Тағы 13-ө ошондай ҡорамал һатып алып, прививка яһатырға теләүселәрҙе ҡабул итә. Прививка эшләтер алдынан кеше үҙенең участка врачына мөрәжәғәт итергә, анализ бирергә, анкета тултырырға тейеш. Яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцина ике этапта яһала, йәғни беренсе компонентты яһағандан һуң 21 көн үткәс, икенсеһе һалына.

Әйткәндәй, 2021 йылдың яҙына коронавирус менән ауырыу һәм вафат булыу күрһәткестәренең икеләтә кәмеүе ихтимал. Был хаҡта РИА Новости агентлығына Иҡтисади тикшеренеүҙәр үҙәгенең статистика һәм моделләү буйынса эксперты Агаси Тавадян хәбәр итте. Шулай ҙа артабан тәбиғи яҙғы пик менән бәйле сирҙең йәнә таралыуы мөмкин булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды эксперт. Тиҙҙән хәлдең ҡапыл яҡшырыуы ихтимал, тип иҫәпләй ул. Быға, әлбиттә, бөтә халыҡҡа прививка яһай башлау булышлыҡ итеүе көн кеүек асыҡ. Вакцинация ковидты бөтөнләй юҡҡа сығарыу һәм яңы тулҡындың башланыуына юл ҡуймау өсөн мотлаҡ, тип иҫәпләй Агаси Тавадян.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҮЛӘКҺӘ ЕҪЕ



**Ковид сирен үткәреүселәр организмдың һуңынан бер нисә ай быҒаса күҙәтелмәгән, аңлашылмаған торошта булыуын, хәлһеҙлек кисереүҙәрен, йоҡоһоҙлоҡтан интегеүҙәрен белдерә. Хатта ҡайһылары һауыҡҡандан һуң бер нисә ай үткәс, ҡапыл еҫтәрҙе бөтөнләй башҡа төрлө тоя башлауына аптырай. Яңыраҡ ҡына бер танышым үҙенең социаль селтәрҙәге аккаунтында: "Тәүҙә йомортҡа, балыҡ иҫкергән икән тип уйлай инем, һуңынан барлыҡ аҡһымлы ризыҡтарҙан үләкһә еҫе сығыуын аңғарып ҡалдым. Һуған ашағандан һуң бөтөн тәнемдән һуған еҫе аңҡыған кеүек. Ял көндәрендә хатта сәғәт һайын душта ҡойоноп мәшәҡәтләндем. Ковид сирен үткәреүселәр, ә һеҙҙең еҫ тойоуығыҙ үҙгәрмәнеме?" - тип мөрәжәғәт иткәйне. Бер аҙҙан ул тағы ла яңы пост өҫтәне: "Аҡылдан яҙаммы әллә тиһәм, баҡтиһәң, ысынлап та, постковид осоронда еҫ һиҙеү үҙгәреүе мөмкин икән..." Һәм ул түбәндәге мәҡәләгә һылтанма ла һалды.**

"Ҡайһы бер пациенттар ковид менән сирләгәндән һуң хушбуй, ҡыҙҙырылған ит һәм көнкүреш химияһы еҫе урынына балыҡ, тәмәке һәм үләкһә еҫен тоя. Медиктар белдереүенсә, бындай симптомдар сирләгән ваҡытта тулыһынса еҫ һиҙмәгән пациенттарҙа һауыҡҡандан һуң аҙна йәки бер нисә ай үткәс барлыҡҡа килеүе мөмкин.

Инфекцияның бындай эҙемтәһе тураһында быға тиклем Американың AbScent хәйриә ойошмаһы вәкилдәре белдерә. Улар дауалау ысулдарын эшләүҙә ярҙам итеү өсөн аносмия (еҫ һиҙеүҙе юғалтыу) һәм паросмия (еҫ тойоуҙың үҙгәреүе) менән ыҙалаған меңдәрсә пациенттан мәғлүмәт йыя. AbScent мәғлүмәттәре буйынса, ковид менән ауырып һауығыусылар насар балыҡ йәки көкөрт еҫенә, шулай уҡ "насар татлы еҫ"кә зарлана. Мәскәүҙән 22 йәшлек бер һылыу, мәҫәлән, сирләгән ваҡытта бер ай самаһы бөтөнләй еҫ тоймауын белдерә. Һуңынан еҫ һиҙеүе яйлап кире ҡайта, әммә һауыҡҡандан һуң өс ай үткәс, еҫтәрҙең ғәҙәттәгесә булмауын аңлай башлай. "Бер ваҡыт ҡалала китеп барғанда ҡыҙҙырылған һуған менән ацетон һәм көйөк еҫе даими эҙәрлекләүен һиҙҙем. Тәбиғәттә бындай еҫ юҡ. Баҡтиһәң, эргәмдә сейә еҫле тәмәке тарталар икән. Һуңынан был еҫ косметика ҡулланғанда ла, теш таҙартҡанда ла, көнкүреш химияһын ҡулланып фатир таҙалағанда ла барлыҡҡа килә башланы", - ти ул. Был еҫ уны бер нисә ай инде эҙәрлекләй.

Псковтан Екатерина Попова (исемдәр үҙгәртелгән) менән дә шуға оҡшаш хәл була. Уны даими рәүештә тәмәке еҫе йонсота, хатта танау эсе ҡысыта, күҙҙәре йәшләнә. Ул башта дүрт төн рәттән йоҡлап китә алмай, һуңынан төн уртаһында тәмәке еҫенән уяна. "Был еҫтән күңелем уйнай, йоҡоһоҙлоҡтан ҡуҙғыусанға әйләндем, илағы килә", - ти. Был симптом менән ул үҙаллы көрәшергә була һәм дарыухананан сәй ағасы майын алып, ныҡ итеп шуны еҫкәй, төнгөлөккә карауаты эргәһенә ҡуя. Осраҡлыҡмы, әммә бер нисә көндән тәмәке еҫе юҡҡа сыға.

Екатеринбургтан Анастасияға еҫ тойоуы кире ҡайтһын өсөн биш ай көтөргә тура килә. Ул ризыҡ еҫен күтәрә алмай. "Ашарға бешерә башлаһалар, минә кеше итен бешергән кеүек тойолдо, ҡот осҡос серек еҫе сыға ине", - ти ул. Үләкһә еҫе бигерәк тә ит бешергәндә йәки йомортҡа ҡурғанда барлыҡҡа килә. Ул үҙе В төркөмө витаминдары менән дауаланып ҡарай, әммә хәл үҙгәрмәй. Бары тик биш айҙан һуң ғына ҡәҙимге хәленә ҡайта. Ул бындай хәлдә ҡалыусыларға психологик тороштарына иғтибар итергә кәңәш бирә.

"Семейная" клиникаһының баш терапевы Александр Лаврищев был хаҡта "Газета.Ru"ҙа шундай аңлатма бирә: еҫ тойоу үҙгәрә, һәм был процесс шунда уҡ түгел, яйлап күҙәтелә башлай, сөнки коронавирус үпкә туҡымаларын ғына түгел, нервылар системаһын да зыянлай.

Шулай уҡ белгестәр билдәләүенсә, еҫ һиҙеү төрлөсә, иң күбе ярты йылда тулыһынса тергеҙелә. Был процесты тиҙләтеү өсөн еҫ һиҙеү рецепторҙарын төрлө эфир майҙары менән дөрөҫ стимуляциялау, бер үк ваҡытта күреү һәм менталь механизмдарҙы эшкә егеп, нимә еҫкәгәнегеҙҙе күҙ алдына килтереп башҡарырға кәрәк. Яҡшы ЛОР-белгескә мөрәжәғәт итеү ҙә урынлы, ул еҫ һиҙеү нервыһының елһенеүен бөтөрөргә ярҙам итәсәк.

ҺАБАҠТАР

**Эшкә йөрөгән юлымда көн дә иртән нурлы йөҙлө бер ханымды осрата торғайным. Бер яҡта йәшәй инек шикелле, юлымда башҡа ваҡыттарҙа ла йыш ҡына тап булды үҙе. Ихлас йылмайыуы менән әйләнә-тирәһен йәмләп үтеп китә торғайны ул. Шул бәхеттән миңә лә мул ғына өлөш тәтене, уны осратҡан саҡтарҙа кәйефем күтәрелде, үҙем дә һиҙмәҫтән йылмайып ҡуя инем. Үткән һайын уға һоҡланып, күңелемде матур хис-тойғоларға байытып уҙҙым. Үҙен тотошо, атлап килеше менән үк башҡаларҙан айырылып торған кеше ине ханым.**

# БӘХЕТТЕ...

## күрә беләйек



Һәр иртәлә ошо нурлы балҡышлы ҡатынды осратыуыма күптән өйрәнеп тә бөткәйнем инде. Билдәле тәңгәлгә еткәс, үҙем дә һиҙмәҫтән, күҙҙәрем менән уны эҙләр булдым. Башымда йыш ҡына уға ҡарата "Бәхетлелер" тигән уй тыуа ине, сөнки тап шундайҙар ғына донъяны йәмләп, башҡаларға ҡот өҫтәп, нур биреп йәшәй ала. Байтаҡ ваҡыттан һуң осраҡлы ғына был ханымды яҡшы белгән танышымды тап иттем.

- Ул бит дауалап булмаҫлыҡ сир менән көрәшә. Күпме ғүмере ҡалғанын бер кем дә, хатта табиптар ҙа белмәй, - тип һүҙ башланы әңгәмәсем. - Кешеләр менән дә аралашмай, өйөндә бикләнеп байтаҡ йәшәгәндән һуң үҙен ҡулға алып, тормошон тулыһынса үҙгәртеп ебәрҙе ул. Булған аҡсаһына матур кейемдәр, биҙәүестәр һатып алды, сәсен киҫтереп, башҡа төҫкә буятты. Көн дә тиерлек урамға, кешеләр араһына сығып йөрөй башланы. Магазиндан йәне теләгән ризығын һатып алып ашай, концерттарға йөрөй, бейеү түңәрәгенә яҙылды, спорт менән дә шөғөлләнә.

- Сирләгәнсе нисегерәк йәшәй ине һуң? - Ишеткәндәремдән бер аҙ шаңҡып ҡалһам да, танышыма ошо һорауымды бирҙем.

- Ғүмере буйы ашарын ашамай, кейерен киймәй, үҙен күп нәмәнән сикләне ул. Кешеләр менән дә әллә ни аралашып барманы. Донъяның тик насар яҡтарын ғына күрҙе, тормошонда шатлыҡ-ҡыуаныҫҡа урын да ҡалдырманы, буғай. Уйлап ҡараһаң, үҙе бәхетһеҙ ҙә ҡатын түгел ине. Ошо донъяла йәшәү үҙе үк бәхет бит ул, һылыу. Аңлай белһәң...

Танышым менән булған һөйләшеүҙән һуң юлымда осраған теге ханымға тағы ла нығыраҡ иғтибар итә башланым, уның өсөн борсолдом, йөҙөндә, ҡиәфәтендә үҙгәрештәр эҙләнем. Берҙән-бер көндө теге яуыз сир уны аяҡтан йыҡыр ҙа, үҙен башҡа осрата алмам тигән уй тынғы бирмәне. Уның урам йәме булып ҡояштай балҡып, күбәләктәй осоп ҡына янымдан үтеп йөрөүенә шул тиклем өйрәнеп киткәйнем бит!

Ул бер ҙә үҙгәрмәне. Һаман да йәш ҡыҙҙар ише оса-ҡалҡа, еңел генә атлап, ҡайҙалыр ашығыр булды. Ярты йыл самаһы мин ханымды күҙ унынан ысҡындырманым, тик бер көн килеп мин уны юғалттым... Йәйге йәмле иртәне мин унһыҙ ғына ҡаршы алдым, ул көндө берәү ҙә миңә ихлас йылмайыу бүләк итмәне, нурлы балҡышы менән кәйефемде күтәрмәне...

Ханым хаҡында һорашмаҡ булып, уны белгән апайға шылтыраттым һәм таныш түгел танышымдың баҡыйлыҡҡа күсеүе хаҡында хәбәр алдым.

- Ҡайғырма, ул бик бәхетле булып китте, - тип мине тынысландырырға ашыҡты апай. - Донъяның бар матурлығын күрергә, ләззәтен татырға, үҙен һәм башҡаларҙы яратырға, ә иң мөһиме - йәшәгән һәр минутының ҡәҙерен белергә өйрәтте уны яман сир. Тормошта бер ни ҙә осраҡлы түгел, сир рәүешендә ебәрелгән һынау аша ул күп нәмәне аңланы. Шуға ла ғүмеренең һуңғы көндәрен кешеләргә изгелек эшләп, бәхет өләшеп кенә үткәрҙе. Үҙең әйтәһең бит, урам, ҡала йәме булып ҡына йөрөнө, тип. Күпме ваҡыт һин үҙең дә уның йылыһына ҡойоноп йәшәп алдың бит, күңелеңде йылыттың...

- Эйе шул, - тигән булдым танышымдың әйткәндәрен хуплап, әммә башымда ҡайнашҡан уйҙарым ғына тынғылыҡ бирмәне.

Тормошта бер ни ҙә осраҡлы түгел, тиһәләр ҙә, беребеҙгә лә донъяның йәмен әллә ниндәй ауыр һынауҙар аша күрергә, яндағыларҙың ҡәҙерен улар аша белергә тура килмәһен ине. Бөгөн үк аңлайыҡ ғүмерҙең берәү генә икәнен, бөгөн үк бәхетле булып өйрәнәйек әле.

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ЯБАЙҘАН БАШЛАЙЫҠ

**Беҙ, Ишембай ҡалаһы ағинәйҙәре, яңыраҡ ҡына Хәйбулла, Учалы, Баймаҡ, Белорет районы ағинәйҙәре башлаған һөйләшеүгә ҡушылып, йәш быуынды тәрбиәләү мәсьәләһе буйынса фекерләшеп алдыҡ.**



"Балаңа туған телен өйрәт" тигән ҡағиҙә, эйе, иң мөһиме. Ошо йәһәттән мин үҙ тәжрибәмдән сығып, ябай ғына программа тәҡдим итәм. Балаларыбыҙға әсә телебеҙҙе ябайҙан башлап өйрәтәйек. Ҡайһы телде өйрәнһәң дә, был энә менән ҡойо ҡаҙыу һымаҡ. Шуға, эште ябай ғына күренгән, әммә телдең нигеҙен тәшкил иткән төшөнсәләрҙе өйрәтеүҙән башлайыҡ. Беренсенән, баланың теле үҙенең һәм атаһының, әсәһенең исемен, фамилияһын, адресын башҡортса әйтеп асылһын. Икенсенән, ғаилә ағзаларына әсәй, атай, өләсәй, олатай, ҡусты, апай һ.б. тип, башҡортса өндәшә белһен. Өсөнсөнән, һандарҙы, йыл миҙгелдәрен, аҙна көндәрен башҡортса өйрәтәйек. Был төшөнсәләр бик мөһим, сөнки уларҙы бөгөн балалар түгел, ололар ҙа янылыш әйтә. Шунан балаға үҙе теләгән йәки ололар һайлап алған бер шиғыр ятлатырға һәм бер йыр өйрәтергә кәрәк. Мәҫәлән, мәктәптәрҙә "Бөрләгән", "Шәл бәйләнем" тигән йырҙарҙы башҡара уҡыусылар. Йырлағанда улар өндәрҙе дөрөҫ әйтә, һүҙҙәрҙе лә белеп ҡала. Мәҫәлән, ошо шиғырҙы ятлатырға була иң бәләкәстәргә:

*Һаумы, ҡояш,*
*Һаумы, яҡты көн,*
*Һаумыһығыҙ, туғандар!*
*Мин сәләмәт,*
*Мин матур.*
*Мин Салауат кеүек*
*Батыр.*

Йә булмаһа, бына тағы бер бик мәғәнәле һәм ҡыҫҡа ғына шиғыр бар:

*"Ерҙә беҙгә ни кәрәк?*
*Атай һәм әсәй кәрәк.*
*Ерҙә беҙгә ни кәрәк?*
*Беҙ йәшәгән өй кәрәк.*
*Ерҙә беҙгә ни кәрәк?*
*Беҙ һөйләшкән тел кәрәк.*
*Ерҙә беҙгә ни кәрәк?*
*Тыуған-үҫкән ил кәрәк".*

Ейән-ейәнсәрҙәр күңелендә туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү өсөн "Тамыр"ҙың башҡортса тапшырыуҙарын, "Аҡбуҙат", "Аманат" журналдарын яҙҙырайыҡ. Һәр кем үҙ район гәзитен алдырһын. Бына шундай ғәмәлдәрҙән башлайыҡ эште. Шулай көндәлек ҡулланылышта булған ябай һүҙҙәрҙән һуң бала күңелендә ҡыҙыҡһыныу уянғас, телдең нескәлектәрен төшөндөрөүгә әйләп күсербеҙ.

**Клара МОРТАЗИНА,**
**Ишембай ҡалаһының**
**"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НАСАР ҒӘҘӘТТӘН ҠОТОЛ

Ғәҙәттәрең һинең булмышыңды асыҡ сағылдыра. Ғәҙәттәреңде үҙгәртмәйенсә тороп, тормошонда тамырынан үҙгәреш яһап булмай. Әгәр һин бәхетле, тыныс, һау-сәләмәт, һаплы, үҙ алды һәм унышлы икәнһең, ул саҡта ғәҙәттәреңде үҙгәртеү кәрәкмәй. Кире осраҡта зарарлы ғәҙәттәрҙән ҡотолоу беренсе сиратта торған бурыстарыңдың береһенә әйләнергә тейеш.

Күбебеҙ тормошобоҙҙоң ни тиклем кимәлдә зарарлы ғәҙәттәрҙән зыян күреүен күҙ алдына ла килтермәй. Зиһенебеҙҙә һәм үҙәк нервылар системаһында янылыш көйгә көйләнгән күпме реакция бар. Тойғоларыбыҙ һәм ғәмәлдәребеҙ ни тиклем хаталы, боҙолған йәки деструктив булмаһын, үҙебеҙҙе нисек өйрәткәнбеҙ, шулай йәшәүҙе дауам итәбеҙ. Тимәк, үҙеңде "өйрәнеү" һәм "ҡабаттан программалаштырыу" осоро аша үтергә кәрәк.

Ҡағиҙә булараҡ, беҙ кире ғәҙәттәрҙең ғибрәтле һабаҡ булырлыҡ эҙемтәләренән арыныраға теләйбеҙ, ләкин ғәҙәттәрҙең үҙҙәренән ҡотола алмайбыҙ. Әйтәйек, диетаға ултырыусыларҙы күҙәтегеҙ әле. Асығыусы үҙен өләштән мәхрүм ҡалған кеүек тоя башлай. Ул ябығырға, матурыраҡ күренергә, үҙен яҡшыраҡ тойорға теләгәйне лә... ләкин бер нисек күп ашауҙан баш тарта алмай. Һөҙөмтәлә бөтә уйҙары ашауға ҡайтып ҡала. Ул турала күберәк уйлаған һайын, шул тиклем ныраҡ ашағыһы килә, ахыр килеп, ошо теләге еңә.

Үҙ-үҙеңде тота белеү ярҙамында ғына тормошоңдо үҙгәртә алам икән, тип уйлама. Әгәр кеше ысынлап та ябығырға теләй икән, ул бөтә иғтибарын күп ашау ғәҙәтенән арыныу идеяһына йүнәлтергә тейеш.

Ниндәйҙер ғәҙәтеңдән ҡотолоу өсөн иң элек һин был ғәҙәттең үҙеңдә булыуын нығлап аңларға тейешһең. Үҙ етешһеҙлектәреңде таныу һинә уларҙы еңергә ҡамасаулай. Насар ғәҙәттәреңде һүҙ менән генә шелтәләү уларҙың ҡармау көсөн арттыра, үҙеңде еңергә маташыуыңды юҡҡа сығара. Үҙеңде ғәйепле тойоу уларҙы нығыта ғына.

Беҙ кире ғәҙәттәрҙе бөтөрөп, яңы ыңғай ғәҙәттәр булдырырға тейешбеҙ. Иҫке ғәҙәттәрҙе файҙалы, ыңғай фекерҙәр һәм ғәмәлдәр менән ҡыҫып сығарырға кәрәк. Бала саҡта ата-әсәйең һинән нимәнелер тартып алһа, урыныңа алмашҡа икенсе берәй нәмә тәҡдим итә ине бит. Был һинең иғтибарыңды тартып алынған әйберҙән ситкә йүнәлтә ине.

Һинең именлегеңә зыян итеүсе кире ғәҙәттәреңдән ҡотолоу өсөн түбәндәге программаны файҙалан:

**Беренсе аҙым.** Түбәндәгеләрҙе яҙып ал:

- Ниндәй кире ғәҙәтеңде ыңғайға алмаштырырға теләйһең?

- Иҫкеһе урынына ниндәй ыңғай ғәҙәтте йәки тәртип схемаһын үҫтерергә теләйһең?

- Иҫке кире ғәҙәтеңде алмаштырыу өсөн ниндәй саралар күрәсәкһең?

- Быға өлгәшеү өсөн иң ябай һәм ҡулайлы ысул нимә булыуы мөмкин?

**Икенсе аҙым**

- Кире ғәҙәтеңде үҙгәртеүгә өлгәштең, ти. Яңы ыңғай ғәҙәтеңдең өҫтөнлөктәре менән ләззәтләнәм, тип күҙ алдына килтер.

- Һинең фараҙың менән килешеүсе ыңғай раҫлауҙы һайла һәм файҙалан.

**Өсөнсө аҙым.** Үҙ ғәмәлдәреңде күҙәт һәм теләгәнгә өлгәшеү юлындағы унышһыҙлыҡтарыңды билдәлә бар. Иҫеңдә тот: үҙеңде сикләмә һәм ғәйепләмә. Ә ғәҙел иҫкәрмә яһап, кәрәкле төҙәтмәләр индер.

**Дүртенсе аҙым.** Кәмендә 21 көн буйына яҙыуҙар алып бар.

Был дүрт аҙым һинә яңы ыңғай ғәҙәтеңде зиһенеңдә программалаштырырға ярҙам итәсәк. Һуңынан был ҡәҙимгә ғәмәлдәрең булып китәсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 8 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.15, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "За первого встречного". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "Марго: Огненный крест". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 9 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.15, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "За первого встречного". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 По сути дела. [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Марго: Огненный крест". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Детей много не бывает. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 10 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.15, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "За первого встречного". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Саша Соколов. Последний русский писатель". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**0.00 Т/с "Марго: Огненный крест". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 Башкорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 11 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.15, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "За первого встречного". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 На ночь глядя. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [0+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Т/с "Марго: Огненный крест". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**5.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.30 "Весело живем!" [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

## 12 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.25 Модный приговор. [6+]
12.15 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Выход". [16+]
1.40 Вечерний Unplugged. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина. [16+]
0.15 Х/ф "Мой любимый гений". [12+]
3.25 Х/ф "Удиви меня". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Непобедимая и легендарная. История Красной Армии". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Марго: Огненный крест". [16+]**
**2.15 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]**
**3.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.00 "Байык" представляет... [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**5.30 "Бай". [0+]**

## 13 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Анна Герман. Дом любви и солнца". К 85-летию певицы. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.45 Д/ф "Анна Герман. Эхо любви". К 85-летию певицы. [12+]
14.45 "ДОстояние РЕспублики: Анна Герман". К 85-летию певицы. [12+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Д/ф "Правда о "Последнем герое". [16+]
0.10 Х/ф Премьера. "Ничего хорошего в отеле "Эль Рояль". [18+]
2.30 Модный приговор. [6+]
3.20 Давай поженимся! [16+]
4.00 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Чужая". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Найди нас, мама!" [12+]
1.10 Х/ф "Иллюзия счастья". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт, посвященный памяти Хусаина Ахметова. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 3.00 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**1.15 Т/с "При загадочных обстоятельствах". [16+]**
**3.45 Спектакль "Руди - never off". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 14 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Личные обстоятельства". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.20 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
17.05 Чемпионат мира по биатлону-2021. Мужчины. Гонка преследования. Прямой эфир из Словении.
18.00 Премьера. "Я почти знаменит". [12+]
19.20 Чемпионат мира по биатлону-2021. Женщины. Гонка преследования. Прямой эфир из Словении.
20.05, 21.50 "Точь-в-точь". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
23.35 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.35 Д/с "Их Италия". [18+]
2.15 Вечерний Unplugged. [16+]
3.05 Модный приговор. [6+]
3.55 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 2.30 Х/ф "Алиби надежда, алиби любовь". [12+]
6.00 Х/ф "Любовь приходит не одна". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Чужая". [12+]
17.30 Танцы со звездами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40, 0.20 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
23.45 Действующие лица с Наилей Аскер-заде. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**19.15 Д/ф "Ҡурай". [12+]**
**19.45 Лидеры региона. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Т/с "При загадочных обстоятельствах". [16+]**
**2.00 Спектакль "Черный иноходец". [12+]**
**3.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**3.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫНА - 30 ЙЫЛ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡудаш. Таҙғара. Ҡотоп. Сауҡа. Быйма. Мәжбүри. Чабан. Толҡа. Биҡҡол. Ыштан. Ата. Табан. Шама. Ауди. Рәсем. Вәкил. Буҙа. Атҡолаҡ. Ҡымыҙ. Ғарипов. Йылайыр.

**Вертикаль буйынса:** Чанышева. Субботник. Наян. Ала. Таяҡ. Турғай. Амеба. Ҡаҙаҡ. Амиго. Логика. Табаҡташ. Уҡа. Штамп. Бит. Тараҡ. Охра. Ҡала. Аша. Намаҙ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (26) дүшәмбе | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 16:36 | 18:06 | 19:36 |
| 9 (27) шишәмбе | 7:22 | 8:52 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 10 (28) шаршамбы | 7:20 | 8:50 | 13:30 | 16:41 | 18:11 | 19:41 |
| 11 (29) кесе йома | 7:18 | 8:48 | 13:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |
| 12 (30) йома | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 16:45 | 18:15 | 19:45 |
| 13 (1) шәмбе | 7:14 | 8:44 | 13:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 14 (2) йәкшәмбе | 7:12 | 8:42 | 13:30 | 16:49 | 18:19 | 19:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ӘЙ!*

## ҺҮГЕНМӘ!

Нейрофизиолог, невролог Александр Будик, һүгенеү һүҙҙәре ҡулланғанда кешенең үҙәк нервылар системаһы ҡуҙғый, тигән мәғлүмәте менән уртаҡлашты, тип хәбәр итә EVO-RUS.COM яңылыҡтар порталы. Белгес фекеренсә, һүгенеү һүҙҙәре үҙәк нервылар системаһы өсөн үҙенә күрә агрессия булып тора. Норматив булмаған лексика арҡаһында кеше стресс хәленә килеүе мөмкин. Был ваҡыт кеше бер ниндәй ауыртыныу һиҙмәүе лә ихтимал. Невролог һүҙҙәренсә, стресс гормондарының юғары күрһәткесе үҙәк нервылар системаһының ауыртыныу һиҙеү һәләтен киҫкен үҙгәртә ала. Көслө ауыртыуҙы кеше, ҡағиҙә булараҡ, ғәҙәти хәлдә тоя ала, ә инде ул ныҡ ҡыҙған хәлендә ауыртыуҙы һиҙмәҫкә лә мөмкин. Әлеге һүгенеү һүҙҙәре менән дә шундай уҡ хәл күҙәтелә: кеше һүгенгәндә ауыртыныу тойғоһон юғалта.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 февраль "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашенинников). 12+
**10 февраль "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+
**11 февраль "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов). 12+
**12 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева). 12+
**13 февраль "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**14 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18:00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 февраль "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 6+
**10 февраль "Аҡ мөғжизә"** (М. Кәрим, М. Баш-киров). 12+
**12 февраль "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+
**13 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 14.00 0+
**"Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева) музыкаль риүәйәт. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13 февраль "Муха-Цокотуха"** (И. Романов), 12.00, 14.00, 16.00 0+
**14 февраль "Большой секрет"** (А. Рахманкулова), 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**9 февраль "Я вас любил"** А.С. Пушкиндың музыкала мөхәббәт лирикаһы. 6+
**13 февраль "Мөхәббәт миҙгелдәре"** концерт. 18.00 6+
**14 февраль "Орган-этно и не только"** концерт. 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 февраль "Хушығыҙ, хыялдарым"** (Ә. Атнабаев), драма. 12+
**12 февраль "Килдең, киттең - хуш байғош..."** (М. Задорнов), комедия. 12+
**13 февраль "Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драма. 12+
**14 февраль "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 0+

### Сибай театр-концерт берекмәһе

**"Донъя матур, донъя шундай матур!"** концерт программаһы менән
**8 февраль -** Борай,
**9 февраль** - Николо-Березовка,
**10 февраль** - Нефтекама,
**11 февраль** - Баҡалы,
**12 февраль -** Дүртөйлө сәхнәләрендә. 6+

## ЗЫЯНЛЫ ӨС АҘЫҠ

Өс төр аҙыҡ-түлектән баш тартыу яңы коронавирус инфекцияһын иҫкәртеүгә булышлыҡ итә. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы неврологы Мансур Ҡотлобаев әйтеүенсә, тоҙ, шәкәр һәм май организмды ҡаҡшата, шуға күрә уларҙы ҡулланыуҙы кәметергә кәрәк.

Ә бына Республика остеопорозды иҫкәртеү һәм дауалау үҙәге етәксеһе Илфат Ғафаров һөйәктәрҙе ҡаҡшатыусы бөртөклө кофе эсеүҙе кәметергә тәҡдим итә. "Һөйәктәрҙең ныҡлығы өсөн беҙ өлкәндәргә Д3 витаминын ҡулланырға ҡушабыҙ, ләкин һәр төрлө ҡиммәтле биологик өҫтәмәләргә аҡса әрәм итмәгеҙ, бөтөн витамин һәм өҫтәмәләрҙә лә уларҙың биологик составы яҡынса бер үк кимәлдә үҙләштерелә", - ти И.Ғафаров.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫН...

## музейҙа күрерһегеҙ



**Башҡорт тарихы йылында бик әһәмиәтле төрлө проекттарға старт биреү планлаштырыла. Шуларҙың береһе - Башҡортостанда Ҡаһым түрә һәм Төньяҡ амурҙары музейын ойоштороу. Был турала БР Мәҙәни мирас объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Данир ГӘЙНУЛЛИН менән әңгәмәләштек.**

**Яңы музей асыу зарурлығы һәм уның үҙенсәлектәре ниндәй буласаҡ?**

- Башҡортостанда төрлө музей комплекстары бар, әммә 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир яҡташтарыбыҙ иҫтәлеген һаҡлаған айырым музей республикала әлегә юҡ ине. Шуға күрә Стәрлетамаҡ районы хакимиәте һәм райондың күренекле шәхесе Вельмир Аҙнаев Ҡаһым түрәгә арналған музей асыу башланғысы менән сыҡҡас та БР Милли музейы генераль директоры Марат Зөлҡәрнәев менән был идеяны хупланыҡ. Әйтергә кәрәк, әлеге көндә Стәрлетамаҡ районында тарихи-крайҙы өйрәнеү музейҙары, урыҫ, татар, украин тарихи-этнография музейҙары эшләй, Айыусы ауылында Ҡаһым түрә һәм Ватан һуғышы яугирҙары хөрмәтенә 2006 йылда стела, "Ашҡаҙар" йырының һүҙҙәре сүкеп яҙылған таш һәйкәл, Ерғән тауы эргәһендә Килмәк Нөрөшев иҫтәлегенә һәм Стәрлебаш районы Күндерәк ауылында Тәтегәс бейгә стелалар ҡуйылған. Ғөмүмән, был төбәк халҡы үҙ тарихын белеп, шәхестәрен баһалап, күтәреп йәшәй һәм башҡорт халҡының тарихына арналған айырым музей асыу зарурлығы күптән бар. Ҡаһым түрә һәм Төньяҡ амурҙары музейын Стәрлетамаҡ районының Мырҙаш ауылы мәҙәниәт йортоноң ике ҡатлы матур бинаһында ойоштороРға ниәтләнек. Уның майҙаны 300 квадрат метрлыҡ булыр. Музейҙы киләһе йылдың йәй айҙарына өлгөртөргә теләйбеҙ. Әлбиттә, был 2022 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышының 210 йыллығын билдәләүгә шәп проект буласаҡ. Бынан тыш, һуңғы осорҙа Башҡортостанда тарихи-танып белеү туризмын үҫтереү турһында йыш телгә алына һәм бына был музей ошо йәһәттән дә бик әһәмиәтле. Сөнки Мырҙаш ауылы Ырымбур трассаһынан алыҫ та түгел ерҙә урынлашҡан һәм был төбәктә, бая телгә алыуымса, башҡорт халҡының тарихын сағылдырған матур объекттар байтаҡ. Ғөмүмән алғанда, был музейҙы ойоштороу, асыу - ул башҡорт халҡының тарихына тоғролоҡ менән ҡарау, киләсәк быуындарҙы халҡыбыҙҙың данлы тарихы ваҡиғалары миҫалында тәрбиәләү өсөн бик мөһим. Сөнки донъяла глобалләштереү осоро барған ваҡытта халҡыбыҙҙың данлы яугирлыҡ тарихын күрһәтеү, йәш быуында ғорурлыҡ уятыу киләсәктә телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлауҙа һәм өйрәнеүҙә, беҙҙе башҡорт халҡы итеп күтәреүҙә оло әһәмиәткә эйә.

**Музейҙың фонды нисек тупланасаҡ?**

- Беҙ Рәсәй сиктәрен һаҡлаған ата-бабаларыбыҙ тураһында ғорурланып һөйләргә яратабыҙ, ә музейҙа шул тарихты сағылдырған барлыҡ документтар, ҡомарҡтылар тупланасаҡ. Тәү сиратта Башҡортостандың милли архивында һаҡланған ҡағыҙ документтарҙың күсермәләрен эшләтәсәкбеҙ. Унда 1812 йылғы Ватан һуғышына киткән 28 башҡорт полкының нисек тупланыуынан алып бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. БР Милли музей фондында булған ҡомарҡтыларҙың да күсермәләре алынасаҡ. Рәсәй армияһы һәм Наполеон армияһының атрибуттары, кейемдәре, ҡоралдарын сағылдырған экспонаттар ҙа эшләргә була. Бынан тыш, халыҡта һаҡланып ҡалған шул осорҙағы ҡоралдар, уҡ башаҡтарын күргәҙмәләр өсөн йыйабыҙ. Башҡорт ғәскәрҙәре төрлө литография һәм картиналарҙа һүрәтләнгән, уларҙың да күсермәләрен эшләргә кәрәк. Музейҙа документтар һәм ҡайһы бер ҡомарҡтыларҙың төп нөхсәһе ҡуйылмаһа ла, күсермәләр юғары сифатлы буласаҡ, быға барлыҡ техник мөмкинлектәр бар бөгөнгө көндә. Ғөмүмән, музей өсөн материал етерлек.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

# НАЗАР НӘЖМИГӘ...

**Өфөнөң Совет урамында, Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы янында, Башҡортостандың халыҡ шағиры, РСФСР-ҙың М.Горький исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Назар Нәжмигә (1918-1999) һәйкәл ҡуйыу планлаштырыла.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған йылдың майында Мәҙәниәт министрлығы һәйкәлдең иң яҡшы проектына конкурс иғлан иткәйне. Ведомстволың матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, конкурс оҙайтылды. Унда ҡатнашыу өсөн ғаризалар, проекттар, аңлатмалы яҙыуҙар, график материалдар һәм смета-финанс иҫәп-хисабы 2021 йылдың 27 апрбленә тиклем "Рәсәй Рәссамдар союзы" Бөтә Рәсәй ижади йәмғиәт ойошмаһының Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһенә ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 148.

# "ЯҢЫ МОҢ"

**"Яңы моң" халыҡ-ара конкурсына ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Был хаҡта социаль селтәрҙә проект етәксеһе Элвин Грей (Радик Юльяҡшин) хәбәр итте.**

Конкурсҡа бөтәһе 7 илдән 800 ғариза бирелде. Һайлап алынған 50 кандидат Өфөгә саҡырыла. Супер-финалсыға төп бүләк - 1 миллион һум. Музыкаль проект Башҡортостан Башлығының 30 миллионлыҡ грантына тормошҡа ашырыла. Конкурс март-май айҙарында Башҡортостандың баш ҡалаһында ойоштороа. Бөтәһе 16 телепрограмма була, трансляция төбәк һәм федераль каналдарҙа күрһәтелә. Конкурста рус, башҡорт һәм инглиз телдәрендә йырлаған 18-35 йәшлек башҡарыусылар ҡатнашырға мөмкин. Шоуҙа Рәсәй, милли һәм сит ил эстрадаһы йырсылары, композиторҙары сығыш яһай. Проекттың йәш ҡатнашыусылары менән Рәсәйҙең иң яҡшы белгестәре эшләй, тип вәғәҙәләй ойоштороусылар.

# ОРДЕНЛЫ БУЛДЫ

**Танылған ҡурайсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Наградаһы мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тапшырҙы.**

Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында артистың 65 йәшлек юбилейына арналған концерт булды. Унда филармония солистары, Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, Азат Айытҡоловтың ҡурайсы-коллегалары һәм уҡыусылары ҡатнашты. Азат Айытҡолов - Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан. Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған. Азат Минлеғәле улының иҫеме профессиональ музыканттарға ла, моң һөйөүселәргә лә яҡшы таныш. Музыкант 1978 йылдан алып Башҡорт дәүләт филармонияһында солист-инструменталист булып эшләй. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында башҡорт музыкаль факультетын етәкләй, ҡурайсыларҙың йәш быуынын оҫталыҡ серҙәренә өйрәтә. Азат Айытҡолов бик күп сит илдәрҙә һәм ҡитғаларҙы Башҡортостандың милли сәнғәте менән таныштырҙы, ул республикала һәм унан ситтә уҙғарылған ҙур мәҙәни сараларҙа даими ҡатнаша.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЛА САҠТА ҺӨЙҘӨРӘ,

## үҫә килә көйҙөрә

Яҡшы менән һөйләшһәң, балға шәкәр ҡатҡандай; яман менән һөйләшһәң, эткә һөйәк атҡандай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әлбиттә, һине хәтергә алыуҙары яҡшы, әммә онотоуҙары арзанырағҡа төшә...

**(Фрэнк Хаббард).**

Ҡатын-ҡыҙ ирҙе ожмахтан алып сыҡҡан, бары тик ҡатын-ҡыҙ ғына уны ожмахҡа ҡабат индерә ала.

**(Элберт Хаббард).**

Әгәр ҙә Хоҙай Әҙәмде һауаның ҡабырғаһынан яһаһа, ул ҡалай көслө булыр ине...

**(Мечислав Шарган).**

Кешенең тыуыуы һәм үлеүе, аҡсаһынан йәки башҡа мөлкәтенән яҙыуы ҡыҙғаныс түгел, сөнки быларҙың береһе лә уның үҙенеке түгел. Уның үҙенең төп байлығынан - кешелек дәрәжәһенән яҙыуы ҡыҙғаныс.

**(Эпиктет).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт донъя ҡуйыр алдынан улына шундай васыятын әйткән. "Мин һиңә өс кәңәшемде бирәм, шуны тотһаң, һин бай ҙа, сәләмәт тә, бәхетле лә, мөхәббәтле лә булырһың, - ти.- Һин иртән берәүгә лә үҙең башлап сәләм бирмә - быныһы тәүге кәңәшем. Ауыл һайын йорт һал - икенсе кәңәшем шул. Ай һайын кәләш ал - быныһы өсөнсө васыятым". Атаһы үлгән. Улы атаһын юғалтыу ҡайғыһынан бер аҙ арынғас, уның бағы өс васыяты тураһында уйлана башлаған. Уйлай торғас, тағы ла олораҡ ҡайғыға ҡалған был. "Ҡара әле, атайым миңә ҡалай насар васыят ҡалдырған. Уларҙы нисек үтәмәк кәрәк? Нисек кешеләргә сәләм бирмәй үтеп булһын? Нисек итеп ауыл һайын йорт һалмаҡ кәрәк? Нисек итеп ай һайын өйләнергә була?" Шулай оло ҡайғыға ҡалып йөрөгәндә был бер аҡыллы аҡһаҡалға тап була. Уға үҙ хәлен һөйләп бирә. Аҡһаҡал уға былай ти: "Улым, һин бит атайыңдың васыятын дөрөҫ аңламайһың. Иртән берәүгә лә сәләм бирмә, тигәне, бар халыҡтан алда йоҡонан тор, эштәреңде теүәллә, һинән һуң торғандар һиңә сәләм бирһен, тигәнде аңлата. Ауыл һайын йорт һал, тигәне, ауыл һайын яҡшы дуҫтарың булһын һәм һин уларҙың йортона үҙ йортоңа барып ингәндәй инерһең, тигәнде аңлатыр. Өсөнсө васыяты шул: ир кеше гел генә өйҙә ултырмай, ил гиҙә, мал таба, ана шул эш менән йөрөп килгәндән һуң ҡатынын һағынып ҡайта, һәр ҡайтҡан һайын күрешеү яңынан ҡауышыу һымаҡ була..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 86/02